

Гөлдәр Буләкбаева-Бирғәнова Әбйәлил районының Амангилде ауылында тыуып үҫә. Шундағы мәктәптә, һуңынан Өфөләге Рәми Ғарипов исемендәге 1-се республика башҡорт интернат-гимназияһында уҡый.

Бәләкәйҙән туған телгә һәм әҙәбиәткә ғашиҡ ҡыҙ ете йәшенән балалар һәм үҫмерҙәр гәзит-журналдарына яҙыша башлай. «Башҡортостан пионеры» (хәҙерге «Йәншишмә») гәзитенең йәш хәбәрсеһе була. Рәттән ике тапҡыр тәүге республика башҡорт теле һәм әҙәбиәте олимпиадаларында призлы урындар яулай. Шул ваҡытта киләсәген журналистика менән бәйләргә хәл итә. Гимназияны тамамлағас, Башҡорт дәүләт университетының яңы ғына асылған журналистика бүлегенә уҡырға инә.

Университеттан һуң үҙенә оло тормошҡа юллама биргән «Йәншишмә» гәзите редакцияһына эшкә килә. Һуңғы 14 йылда — баш мөхәррир урынбаҫары.

«Әфлисун тәме» — авторҙың тәүге китабы.

Гөлдәр
Бүләкбаева-Биргәнова

# Әфлисун тәме

*Шиғырҙар, хикәйәләр*

Зәйнәб
Биишева
исемендәге
"КИТАП"
нәшриәте

ӨФӨ · 2012

УДК 821.512.141-1-93
ББК 84 (2 Рос=Баш)-5
Б 90

*Рәссамы Нәркәс Абдуллина*

**Бүләкбаева-Биргәнова Г. М.**
Б 90 Әфлисун тәме: шиғырҙар, хикәйәләр. — Өфө: Китап, 2012. — 96 бит.

ISBN 978-5-295-05529-4

Был китапҡа йәш авторҙың кесе һәм урта йәштәге мәктәп уҡыусыларына тәғәйенләнгән ҡыҙыҡлы шиғырҙары һәм фәһемле хикәйәләре инде. Уның геройҙары тирә-яҡ мөхиткә эскерһеҙ бала күҙе менән бағып, донъяны үҙенсә танырға, дөрөҫ һығымталар яһарға өйрәнә. Яҙыусының ижады кескәй дуҫтарыбыҙҙың күңеленә хуш килер, тип уйлайбыҙ.

**УДК 821.512.141-1-93**
**ББК 84 (2 Рос=Баш)-5**

© Бүләкбаева-Биргәнова Г. М., 2012
© Абдуллина Н. Ф., һүрәттәр, 2012
© Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы, 2012

**ТП—184/12**
**ISBN 978-5-295-05529-4**

# Шиғырҙар





## БӘШМӘКТӘ

Кәрзинемде элеп алып,
Урманға барған инем.
Бер бәшмәк тә осраманы,
Әллә өлгөргән тейен?

Эшләпәңде күтәр әле,
Күрәйем һине, бәшмәк.
Насар малай түгелмен бит,
Ҡасаһың минән нишләп?



Ҡарышһаң әгәр һаман да,
Инәлтеп-ялындырһаң,
Гөлләмә йыйып ҡайтам да
Әсәйҙе ҡыуандырам.

## ДЕГӘНӘК

Кәртә артында мауығып
Баҫтырғанда күбәләк,
Итәгемә һикереп менде
Бер йәбешкәк дегәнәк.

Күлдәгемде, сәстәремде
Һырыны улар йәһәт...
Дегәнәктән ҡотолоуы
Ауыр икән дә һәләк!

## ЮЛ ЯПРАҒЫ

Ҡайҙа баҫһам, шунда үҫкән,
Эй, әрһеҙ юл япрағы.
Нисек кенә белә икән
Минең ҡайҙа барғанды?

— Йәл бит әле, тапалаһың,
Бер аҙ ситкә күсһәңсе.
Ҡойма буйлап, ситән буйлап
Китә биреп үҫһәңсе.

— Кешеләргә файҙалымын,
Дарыу үләне бит мин.
Кәрәкһәм, еңел табырҙар,
Ҡул аҫтында ҡулай, тим.

## БӘПЕМБӘ

Әле генә йәйгән ине
Болон алтын балаҫын.
Бал ҡорттары ҡушҡан ине
Эшкә хатта балаһын.



Ҡай арала юҡҡа сыҡҡан
Шундай йәм, һин әйт миңә?
Бөгөн — йәш, иртәгә — әбей
Һары башлы бәпембә.

## МИНДЕК

Миндек бәйләйҙәр малайҙар,
Ағайҙар һәм атайҙар,
Аҡ яулыҡлы, түбәтәйле
Оло әбей-бабайҙар.

Тау-тау булып ул өйөлдө,
Йөк-йөк булып тейәлде.
Аптырағас, етмәҫме, тип
Ғәжәпләндем бер мәлде.

Атай әйтте: «Уйлайһыңдыр,
Миндек кәрәк мунсала.
Эйе, ләкин киләһе ҡыш
Кәрәгер ул ҡурала.

Күрәһеңме, ҡоролоҡтан
Ер ҡалай яфа сигә.
Малҡайҙарға бесән итер
Үлән һабаҡта кибә.

Шуға күрә быйыл миндек
Мал аҙығы ла булыр.
Ашар уны һарыҡ-кәзә,
Һайланмаҫ хатта һыйыр».

## ҺАНДУҒАС

Һандуғасҡа кем өйрәткән
Шундай матур йырҙарҙы?
Иртәле-кис моңға күмә
Яландарҙы, ҡырҙарҙы.

Эй, ҡошсоғом, ҡурҡмайынса
Яндарыма килһәңсе.
Бер аҙ ғына һин миңә лә
Йыр дәресе бирһәңсе.

## ҠАРҒАЛАР

Урамдағы дәү тирәккә
Оялаған ҡарғалар.
Ҡыҙыҡ күреп ҡарап тора
Күрше-тирә балалар.



Күмәкләшеп ҡарҡылдаша
Ҡарғалар: «Ҡар-ҡар! Ҡар-ҡар!»
Ҡыуған төҫлө балаларҙы:
«Тормағыҙ бында, бар-бар!»

Йәне көйөп, күрше малай
Ерҙән таш алып атты.
Яҙа осто — Дим бабайҙың
Тәҙрәһен барып ватты.

Атаһына эш тыуғанға,
Малайҙың эсе бошто...
Шулай була, рәнйетмәгеҙ,
Ҡарға булһа ла, ҡошто!

## БЕСӘНГӘ!

Күтәрмәгә сығып баҫтым
Ҡояш та тормаҫ борон.
Ана, йәйрәп ята таңғы
Ысыҡҡа туйған болон.

Әле каникул ваҡыты,
Йоҡларға кәрәк, дөрөҫ.
Тик нисек түҙеп ятайым,
Бесән башлана бөгөн!

## ЕГЕТ

— Һәнәгендең йәбе ауыр,
Бәләкәйерәген һайла, —
Шулай тиһә лә олатай,
Артҡа сигенеү ҡайҙа!

Һыр бирмәйем, көсөм етә,
Бына беләккә ҡара.
Ҙур үҫкән егетмен инде —
Йәшем алтыға бара.

## ҠЫРМЫҪҠА МЕНӘН ҺӨЙЛӘШЕҮ

— Ҡайҙа киттең, нәҙекәй бил,
Тейәп үлән ҡыяғын?
— Йорт һаламын көнө-төнө,
Ҡалды бары ҡыйығы.

— Бер аҙ ғына ултырып тор,
Ял ит, харап уңғанһың.
— Йәй йырлаһаң, ҡыш иларһың,
Шуны бел һин, туғаным.

## СЕРӘКӘЙ

Китсе, китсе юлымдан,
Эй, бәйләнсек серәкәй.
Йәллә инде, теймәсе,
Мин бит әле бәләкәй.

## МАШИНА АЛҒАС

«Күрсе, һатып алдыҡ, — тигәс, —
«Нива» ике ишекле»,
Улым оҙаҡ инеп-сығып,
Бик ентекләп тикшерҙе.

«Ниңә ишек икәү генә? —
Аңламайса төпсөндө. —
Минең кеүек тыңлауһыҙы
Сығып ҡасмаҫ өсөнмө?»

## ТЕЛЕВИЗОР

— Әсәй, әсәй! Кил тиҙерәк! —
Саҡыра улым мине. —
Ҡара әле, күрһәтәләр
Телевизорҙан һине.

Эй сәпәкәй итә, көлә,
Унан тағы аптырай:
— Бынау бәләкәй йәшниккә
Һыйҙың, әсәй, ҡайһылай?

## БӘПӘЙ

Алып ҡайттылар бөгөн,
Ҡат-ҡат йүргәккә төрөп,
Мараттарға бер бәпәй,
Бәп-бәләкәй — хас тәтәй.

Ихлас ҡыуанды малай:
«Уйнарға иптәш ҡалай!»
Боҙҙо туғаны уйын —
Иланы көнө буйы.



Түҙмәне бер саҡ Марат,
Әйтте үпкәләп ҡарап:
— Ҡасанға тиклем, әсәй,
Беҙҙә торор был бәпәй?

## АТАЙ ҠОСАҒЫНДА

Ҡустым: «Атай минеке», — ти,
Һеңлем әйтә: «Минеке».
Атай икеһен дә ҡоса:
«Һинеке һәм һинеке».

«Минең ҡосаҡҡа һыя, — ти, —
Тағы ла өлкән улым.
Күңел киң булһа, етә ул
Бөтәһенә лә урын!»

## ЙӘШӘЙЕК ТАТЫУ

Әсәйгә ярҙам итәм тип,
Алдым мин дә бумала.
Иҙән буяу еңел түгел,
Ҡулым, ай-һай, тиҙ тала.

Бер, ике, өс! Бер, ике, өс!
Арттан сағыу эҙ ҡала.
Хуплау һүҙҙәрен ишетеп,
Күңелем үҫә бара.

Күмәкләшеп эй тырышҡас,
Йортобоҙға йәм инде.
Атай, әсәй, матур өйҙә
Татыу йәшәйек, йәме!

## ШАР

Малай мыжый, шарын тотоп:
— Өрөп бир миңә, ағай.
Ҡыйыҡтағын күрәһеңме,
Шундай ҙур булһын, давай.

Ҡусты күңелен күрәм тип,
Ағай өрҙө лә өрҙө.
Харап күңелле был шөғөл,
Шары шартлап, өҙөлдө.

Кескәй малай аптыраны,
Тирә-яғына баҡты:
— Әйтегеҙсе, минең шарым
Ҡайҙа китеп юғалды?

## ҠОРАМА ЮРҒАН

Өләсәйем юрған тегә,
Ябай түгел — ҡорама.
Халҡымдың ошо кәсебе
Бөтөп бара, юғала.

Киҫәк-киҫәк туҡымалар
Була бара бер бөтөн.
Өләсәй, юрған тегергә
Мине лә өйрәт бөгөн!

## ЯРҘАМСЫ

Ҡулдарына күҙ эйәрмәй —
Өләсәйем йөн иләй.
Беләм, ҡышҡа әҙер була
Йылы ойоҡ-бейәләй.

Мин дә уға ярҙам итәм:
Йөнөн алып сиратам.
Өләсәйҙең, уңғаным, тип
Маҡтағанын яратам.

## ӨЛӘСӘЙГӘ — ҠУНАҠҠА

Эй саҡыра үҙҙәренә
Мине йомарт өләсәй.
Баллап ҡына, майлап ҡына
Эсербеҙ икәү, ти, сәй.

Көн дә барыр инем шулай —
Алыҫ түгел йорттары.
Аҙыраҡ уҫалыраҡ шул
Бәйләнсек бал ҡорттары.

## ҺӨТ ЯРАТҠАС

Өләсәйем ҡымыҙ бешә,
Ҡымыҙы бик яй төшә.
Һиҙмәйҙәрме, бында малай
Зарығып һыуһын көтә.

Көнө эҫе. Һәйбәт була,
Әскелтем ҡымыҙ йотһаң.
Тағы һыуһын ҡандырырға
Бара айран, ойотҡан.

Өйөр-өйөр йылҡы, һыйыр
Көтә шуға атайым.
Һөт яратҡас, мин дә теләп
Быҙау, ҡолон ҡарайым.

## ИКМӘК БУЛҺЫН

Инде олатай ҡыуана:
«Булыр өҫтәлдә икмәк».
Баҡһаң, белмәй йөрөгәнмен,
Ямғырҙа икән хикмәт.

Бураларға һыймаҫ булып
Иген ятһын тау ғына.
Үтенеп һорайым, ямғыр,
Ваҡытында яу ғына!

## АҠ БЫЙМА

Аяҡтарым өшөгәнде
Олатай ҡайҙан белде?
Ап-аҡ ҡына, йомшаҡ ҡына
Бер быйма баҫып бирҙе.

Быйылғы ҡыш зәһәр һыуыҡ,
Быймалар бөтәһендә.
Минекен бутайһы түгел —
Аҡ быйма берәү генә.



## ТРАКТОР

Атайымдың тракторы
Һис кенә лә тик тормай.
Әле утын, бесән ташый,
Әле инде ер тырмай.

Иң кәрәкле техника —
Ауылда был «тимер ат».
Атайымдың күршеләргә
Ярҙамы тейә һәр саҡ.

Иртән ишетеп тауышын,
Мин торамын йоҡомдан.
Эш була бит, аш була бит,
Берүк, трактор, боҙолма!

## ҠОЛОН

Ҡолон бүләк итте миңә
Быйылғы яҙ олатай:
«Ҡарап, тәрбиәләп торһаң,
Булыр матур ғына тай».

Бесән һалдым, һыу эсерҙем,
Йөрөттөм туғайҙа ла.
Дәртле көйҙәр уйнап алдым
Хатта ки ҡурайҙа ла.



## АТА ҠАҘҒА

Ниңә уҫал һин, ата ҡаҙ,
Мин бит түгел ҡарсыға.
Бер аҙ ғына бәпкәләрҙе
Һөйгөм килде һаҡ ҡына.

Ҡыҙғанмасы бәпкәләрҙе,
Табайыҡ уртаҡ телде:
Мин һоҡланып ҡарап торам,
Ә һин, маҡтанып, бейе.

## МАҠТАНСЫҠ ӘТӘС

Әтәсебеҙ эй маҡтансыҡ,
Көнө буйы йыр һуҙа:
— Ки-ки-ри-күк! Моңлолоҡта
Мине кемегеҙ уҙа?

Ахыр сиктә, аҡ тауыҡтың
Бар түҙемлеге бөттө.
«Ҡыт-ҡытаҡ!» — тип кәртә аша
Ситкә һикереп төштө.

— Ки-ки-ри-күк! Был ни хәл? — тип
Аптырап ҡалды әтәс.

Баҡһаң, ят әтәс, тибенеп,
Өләшә ем-күстәнәс.

Әйҙә, йырлаһын һандуғас,
Ә әтәс ем сүпләһен.
Һәр кемдең дә был донъяла
Үҙ эше бар, күрәһең.



## ҺЫЙЫР ҺАУҒАНДА

Өлкән апай һыйыр һауа,
Һөт субырлай күнәккә.
Ә мин йәлләп ҡарап торам
Быҙауҡайы Бүләккә.

Бәйле быҙау тартҡылаша,
Ләкин арҡан ебәрмәй.
Бахырҡайҙың ҡарыны ас,
Эскеһе килә мәмәй.

Апай әйтә: «Түҙ, беҙ ҙә бит
Һинең кеүек үк бала.
Яңы һауылған һөт эсеп,
Үҫкебеҙ килә, аңла!»

## ТАҒАРАҠ

Атайымдың ҡулдарында
Йышҡыһы уйнап тора.
Таҡта йышып, нимә эшләй? —
Һин быны минән һора.

Күрәһеңме, тышта — селлә,
Бөтә урын-ер туңған.
Ә турғайҙар ризыҡ эҙләп,
Ҡыйыҡ башына ҡунған.



Атайымдың тағарағын
Элеп ҡуйырбыҙ тышта.
Туҡ булһалар, бирешмәҫтәр
Ҡоштар быйылғы ҡышта.

## БЕҘҘЕҢ МӘСЕТ

Алыҫтан күреп киләһең
Йәшелдән манараһын.
Кем генә беҙҙең мәсеткә
Һоҡланмай ҡарамаһын!

Түбәһе ялтыр ҡалайҙан,
Иң осонда — ярым ай.
Намаҙға инергә булһаң,
Бит, аяҡ, ҡулыңды сай.

Аҙан тауышы тарала
Ауыл буйлап һауала.
Изге моңдо тыңлап, дуҫҡай,
Тән-йәнеңде дауала.



# Хикәйәләр





## ТУП

Билләһи, зарыҡты футбол тубы алып биреүҙәрен көтөп Фәнүр. Атаһы менән әсәһе: «Бына тыңлап ҡына йөрөһәң, туп булыр», — ти. Фәнүр тыңлай. Бер сәғәт, ике сәғәт. Унан, өлкәндәр әйтмешләй, берәй эш боҙа. Малай үҙенсә бер хилафлыҡ та ҡылмай кеүек, ә уға шунда уҡ бармаҡ янай башлайҙар: «Тағы тыңламайһың. Туп эләкмәй инде, вәт».

Ултырып иларҙай була Фәнүр. Ниңә түҙемлеге етмәй икән уның? Ә күпме тырышырға кәрәк икән туплы булыр өсөн? Унан, ул бит эш боҙам тип боҙмай. Тышта оҙаҡлап йөрөһә ни, бөтә малайҙар урамда булғанда, ул ҡайтып китмәҫ бит инде? Өҫтө бысранһа ни, уйнағанда яңылыш ҡына төртөп йыҡтылар ҙа баһа. Уҡытыусы тәртибенә зарланһа ни, ул Миләүшә үҙе бәләсел, ошаҡсы ла һуң.

Төңөлдө тиерлек Фәнүр хыялынан. Шуға күрә бер көн атаһы: «Әйҙә, йыйын, йәйге каникул башланыу уңайынан туп ала барабыҙ», — тигәс, ыша-



ныпта бөтмәне. Нисек инде, бына шулай алырҙар ҙа бирерҙәрме икән? Аңламаҫһың өлкәндәрҙе.

Магазин кәштәһендә өс рәт булып теҙелеп киткән туптарҙы күргәс кенә эсенә йылы йүгерҙе. Төрлө төҫтә, төрлө һүрәт-биҙәкле, төрлөсә хаҡта улар.

— Ҡайһыһы оҡшай? — тип һораны атаһы.

Фәнүр ихатала йыйған тәжрибәһенән белә ниндәй туп һайларға икәнлеген. Тәүҙә — береһен, унан — икенсеһен, өсөнсөһөн түшенә терәп, ике ҡулы менән ныҡ итеп ҡыҫҡылап ҡараны. Йомшаҡтарын кире кәштәгә ҡуйҙы. Ниһайәт, аҡлы-ҡаралы иң ҡаты күренгәненә төртөп:

— Ошонoһо, — тине.

Атлап түгел, осоп ҡайтты малай өйгә. Уға туп алдылар! Хәҙер йорт янындағы спорт майҙансығында йүгерешкән малайҙар янына барып, мине саҡырмаҫтармы тип, өңшәйеп ҡарап тормаҫ. Үҙен хужаларса тотор.

Иртән иртүк өлкәндәр артынан ишек ябылыу менән Фәнүр һикереп торҙо. Мөйөштә күҙҙе ҡыҙҙырып ятҡан тубын алып, һикертеп-һикертеп ҡараны. Уны ҡосаҡлап бүлмәнән бүлмәгә йөрөнө. Ҡыуанысы сикһеҙ булһа ла, күңеленә низер етмәне. Ахыры, балконға сығып, аҫҡа ҡараны. Майҙансыҡта малайҙар йыйыла башлағайны инде.

Туҡта, ишек шаҡыйҙар түгелме? Малай тауышланмаҫҡа тырышып, аяҡ остарында ғына ишеккә яҡынлашты. Баҫҡыс майҙансығын ҡарай торған «күҙ»гә буйы етмәй уның.

Бәхетенә, хәүеф-шомдарын таратып, тыштан: «Фәнүр! Ас, был мин — Наил!» — тигән таныш тауыш ишетелде. Ысынлап та, ҡыңғырауға баҫырға буйы етмәгәнен нисек онотҡан әле ул! Иркен һулап ҡуйҙы ла малай ишекте асты.

Дуҫы, ашығып:

— Әйҙә уйнарға, — тине.

Фәнүргә яңы ғына тубы йәл ине. Кемдәндер типкесләтеп ҡуйғыһы килмәне уны. Шуға ла:

— Ин беҙгә, өйҙә генә уйнайыҡ, — тине.

Наил инәлтеп торманы, түргә уҙҙы. Дуҫының уйынсыҡтары күп икәнлеген белә ул.

Әммә Фәнүрҙең туп уйнағыһы ғына килеп тик торҙо.

— Миңә туп алдылар. Әйҙә футбол уйнайыҡ, — тине ул.

— Ошондамы? — Наил аптырап бүлмәне байҡаны. Ҙур телевизор, уның янындағы быяла өҫтәл өҫтөндәге вазала сәскәләр гөлләмәһе тора, баш осонда — гәлсәр люстра. Туп тейеп, берәй нәмә ярылһа, оло бәлә буласаҡ бит.

Фәнүр ҙә аңланы быны. Тик уйынан кире ҡайтҡыһы килмәне. Шунан, юлын тапҡандай, маңлайына шап иттереп һуғып алды ла ҡысҡырып ебәрҙе:

— Беләм ҡайҙа уйнарға икәнде! Сыҡтыҡ балконға!

Уларҙың лоджияһы киң, иркен. Кухня, зал тирәһенән буйҙан-буйға һуҙылған. Кинән, рәхәтлән генә!

Малайҙар ҡапма-ҡаршы баҫып, тупты бер-береһенә тибә башланы. Осоп килгән тупты туҡтата алмаһаң, ҡаршы яҡ бер мәрәй ала.

— Берәү, икәү, өсәү!.. — Ҡыуаныслы тауыштар яңғырап ҡына торҙо. Оҫта уйнаған дуҫын ҡыуып етергә теләгән Фәнүр йән көсөнә тупҡа типте. Уныһы Наилдың түшенә тейеп ҡаҡлыҡты ла... асыҡ торған балкон тәҙрәһенән сығып китте.

Фәнүрҙең күҙ алдары ҡараңғыланды. Ул тәҙрәгә ташланды. Ә туп ун икенсе ҡаттан ергә осошлай аҫта торған еңел машина түбәһенә төшөп бәрелде лә ситкә һикерҙе. Бәхетһеҙлеккә күрә, машинаның сигнализацияһы эшләп, яман итеп үкерә башланы.

Малайҙар йәһәт кенә тәҙрәнән баштарын ала һалды. «Харап булдыҡ бит! Хәҙер хужаһы килеп етәсәк. Беҙ туп артынан сығыуға елкәләрҙән эләктереп тә аласаҡ», — Фәнүрҙең башынан ҡурҡыныс уйҙар үтте. Дуҫы ла, шөрләп, туҡтауһыҙ, «мин ҡайтам», тип ҡабатланы. Ахыры, уны тиҙ генә сығарып, ишекте бикләп алды. Үҙе бүлмә төпкөлөнә ҡасып, диван артына инеп боҫто.

Бик оҙаҡ ултырғандай булды ул. Шик-шөбһәһен ҡуйыртып, бер мәл ишек шаҡынылар. Малай ҡымшанманы ла. Әллә дуҫы кире килдеме, тип уйлап ҡуйҙы ла, ләкин ҡурҡыуы еңде. Башына тай типмәгән әле уҫал ағайға ишек асырға.

Кискеһен ата-әсәһе эштән ҡайтҡас, Фәнүр уларға бер нәмә лә әйтмәне. Киреһенсә, туп тураһында һүҙ ҡуҙғатып ҡуймаһындар тип, май урлап ашаған бесәйҙәй шым ғына йөрөнө.

Бер аҙҙан түҙмәне, уйнап киләм тигән һылтау менән урамға йүнәлде. Подъездан сыҡҡас, тирә-яғына алан-йолан ҡаранып спорт майҙансығына ыңғайланы.

Ғәҙәттәгесә, малайҙар футбол тибә. Ҡапыл күҙе аяҡ аҫтында тегеләй ҙә, былай ҙа осҡан тупҡа төштө. Аҡлы-ҡаралы, өр-яңы уның тубы! Ихатала әле берәүҙә лә ундай юҡ ине бит!

Фәнүрҙең күҙҙәренә йәш төйөлдө. Хәлһеҙ генә атлап, яҡын килде. Тимер рәшәткәле кәртә буйында кемдеңдер атаһы күҙәтеп ултыра ине. Малай уның янына сүгәләне.

Атай кеше уның кәйефһеҙлеген үҙенсә аңлап:

— Уйнағың киләме? Бар һуң, ҡушыл малайҙарға, — тине.

Фәнүр өндәшмәне. Ике күҙе тупта ине уның. Рәхәтләнеп бер көн уйнап та ҡалманы. Эйәһеҙ ятҡан әйберҙе тиҙ ҡулға төшөрәләр шул. Хәҙер инде ни эшләргә? Атаһына ни әйтер? Һиҙмәй ҡалмаҫ бит бүләгенең юҡ булғанын. Асыуы йөҙөнә сыҡҡан атаһын күҙ алдына килтереп, түҙә алмай, үкереп илап ебәрҙе шул саҡ.

Эргәһендәге ағай был хәлгә шаҡ ҡатты.

— Туҡта-туҡта, ниңә күҙ йәше түгәһең ул? Малайҙар алмаҫ тиһеңме әллә араларына? — тине йомшаҡ ҡына итеп.

Фәнүрҙең яуабы һулҡылдауҙар аша өҙөк-өҙөк сыҡты:

— Ю-ю-юҡ... Был бит минең тубым... Бая балкон тәҙрәһенән осоп төшкәйне. Аҫтағы машина түбәһенә генә...

Ағай уға яҡыныраҡ килде:

— Э-эй, һинең тубың инеме ни? Ә нишләп сығып алманың һуң?

— Сигнализацияһы эшләп китте. Хужаһы машинаһының йәмшәйгәнен күреп, әрләр тип ҡурҡтым.

Ағай шарҡылдап көлөп ебәрҙе:

— Унан ғына тимергә зыян була тиме ни? Вәт фантазёр!

Шунан туп артынан йүгереп китеп барған малайға өндәшеп:

— Марат! Килтер әле тупты бында! — тип ҡысҡырҙы.

Уныһы тыңлаусан ғына ҡаршы атланы.

— Бына ошо малайҙыҡы икән ул. Ҡайтарып бир хужаһына. Икенсе улай үҙ һүҙеңде әйтергә ҡыймай йөрөмә. Эҙләнек бит туптың эйәһен. Марат хатта фатирыңа барып та килде.

Фәнүр тупты ҡулына алып, ике-өстө күккә сөйөп ебәргәс, үҙен уратҡан малайҙарға ҡараны ла:

— Әйҙәгеҙ уйнарға! — тине.

Туп ҡапҡа яғына осто. Бөтәһе лә шау-гөр килеп уның артынан йүгерҙе. Ҡалай күңелле бергә уйнауҙары! Фәнүр малайҙарҙың уның тәҡдименә ризалашҡандарына һөйөнөп бөтә алманы.

## ҠУШАМАТ

Татыу, берҙәм булыуҙары менән мәктәптә дан алған бишенселәрҙә дуҫлыҡ ҡапыл боҙолдо ла ҡуйҙы. Каникулдан һуң уҡырға килгәс,

Рәфис һәр кемгә тиерлек ҡушамат тағыр булып китте. Иптәштәренән ике башҡа оҙон, тауышы ҡарлығыбыраҡ сыҡҡан Ғәлимәгә — «Ата ҡаҙ», сире арҡаһында артыҡ ауырлығынан яфа сиккән Гөлсиәгә — «Суска», ҡыуанғанда йә асыуланғанда һарғылт һоро күҙҙәре ут кеүек янып киткән Илдарға — «Бесәй», ә барыһынан да буйға бәләкәй, ҡыйыуһыҙ Диләфрүзгә «Куян» исемдәре бирелде. Башҡаларға ла өлөш сыҡты. Атай-әсәйҙәре ҡушҡан матур исемдәрен онотоп, бөтәһе лә бер-береһенә алама һүҙҙәр менән өндәшергә тотондо. Китте үпкәләшеүҙәр, талаш-тартыш, йоҙроҡтар эшкә ҡушылды.

Рәфискә генә ел-ямғыр теймәне. Сөнки ул синыфта иң мыҡты кәүҙәле көслө малай ине. Ҡыҙҙар ғына түгел, үҙенең иптәштәре лә ҡурҡа унан. Өҫтәүенә, атаһы бик вазифалы урында эшләй. Улы бынан оҫта файҙалана. Ҡайҙа ял итә барғандарын, күпмегә нимә һатып алғандарын ауыҙ һыуын ҡоротоп һөйләй. Мәктәпкә көн дә ҡиммәтле тәм-том алып килеп, үҙенең янында өйрөлгәндәргә тарата. Кеҫәһенән унлыҡ аҡсалар сығарып, синыфтың күҙ алдында тәкәббер ҡиәфәттә йыртып ырғыта. Ә, түҙмәй, ҡаршы әйткән малай-ҡыҙҙарға ажарланып йоҙроҡтары менән ташланырға ла күп һорамай.

Әлбиттә, иптәштәре уға ла ҡушамат таҡты. Үҙе юҡта ғына Рәфисте «Овчарка Рекс» тип йөрөтә башланылар. Ләкин уның алдында ҡысҡырып әйтергә баҙнат итмәнеләр. Ана, Камил берҙе генә ысҡындырғайны ла, туҡмалып, танауы ҡанап ҡайтып китергә мәжбүр булды.

...Әле лә дәрес бөтөп, тәнәфескә сыҡҡас, Рәфис әле берeһенә, әле икенсеһенә ҡушаматы менән һүҙ ҡатты. Тик, күп тә үтмәй, ҡыңғырау яңғыраны. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Ғәлиә Сабирйән ҡыҙы килеп тә инде.

— Һаумыһығыҙ! Ултырығыҙ. Бөгөн, балалар, диктант яҙабыҙ. Был — бик мөһим контроль эш, баһаһы сиреккә билдә сығарғанда роль уйнаясаҡ, — тине.

Синыф геү итеп ҡалды ла эшкә тотондо. Уҡытыусыһы таҡтаға диктанттың исемен яҙып ҡуйҙы: «Бүләк». Шунан һөйләмдәрҙе уҡый башланы: «Мараттың тыуған көнөнә атаһы көсөк бүләк итте. Малайҙың шатлығының сиге булманы, сөнки күптән тоғро эт тураһында хыял итә ине. Көсөктөң көслө, һау-сәләмәт үҫеүен теләп, Рекс тип исем ҡушты». Ошо урында бүлмә буйлап саҡ ишетелерлек шыбырлау үтте. Ғәлиә Сабирйән ҡыҙы дауам итте: «Ләкин көсөк яй үҫте. Өҫтәүенә, аҙ ғына тауышҡа ла өркөп барҙы, өрөүе лә көсһөҙ генә ине...» Бүлмә йәнләнде, унда-бында шырҡ-шырҡ көлгән тауыштар ишетелде. Уҡытыусыһы киҫәтеү яһаны ла артабан уҡыны: «Бына йәй килде. Рекс үҫеп етте. Әммә ул сәүек тоҡомло булып сыҡты...» Бишенселәр дәррәү көлөп ебәрҙе. Уҡытыусыһы ҡулын күтәрҙе, ләкин тыныслыҡ урынлаштыра алманы. Бөтәһе лә Рәфис ултырған парта яғына ҡарап, һыны ҡатып көлә ине. Ә йөҙө ҡып-ҡыҙыл булған малай ғәйепле ҡиәфәттә башын түбән эйгәйне.

Хәлде аңлап, Ғәлиә Сабирйән ҡыҙы ла йылмайып ҡуйҙы:

— Балалар, шау-шыу тамам. Диктантты яҙып бөтөрәйек.

Уҡыусылар дәфтәрҙәре өҫтөнә ҡапланды. Урыҡ-һурыҡ шыбырлауҙар ишетелеп ҡалды, йәнә яҙырға керештеләр. «Марат эте менән малтыуар торған кәртәгә инде. Рекс, ҡыҙыҡ күреп, тимер рәшәткә янына барҙы. Эске яҡта үлән ашаған йорт ҡуяндарына ҡыҙыҡһынып баҡты. Шул саҡ ситтәрәк йөрөгән ата ҡаҙ, бәпкәләрен ҡыҙғаныпмы, эткә ташланды. Рекс ҡасып өлгөрмәне, ныҡ ҡына таланды. Хужаһы саҡ аралап алып ҡалды...»

Инде синыфты тыйып та алып булмай ине. Уҡытыусыһы ла, үҙен саҡ ҡулға алып, битен китапҡа йәшерҙе. Көс-хәл менән диктантты дауам итте: «Ауыртҡан ерҙәрен ялап, иркен тын алыуына, һарай ишегенән буралай һимергән инә сусҡа күренде. Дошманын шәйләп ҡалғандай, ул да Рексҡа йомолдо. Сәбәләнә-сәбәләнә, эт кәртәнән сығып һыҙҙы.

Барып ишек алдында торған сеүәтәнән һөт эсәйем тип эйелгәйне генә, ҡайҙандыр Мыраубай пәйҙә булды. Бесәй, ҡурҡыныс ыҫылдап, йөндәрен тырпайтты. Рекс, ҡото осоп, солан аҫтына инеп йәшенгәнен һиҙмәй ҙә ҡалды...»

Гөр килгән синыфты уҡытыусыһы нисек шымдырыр ине, билдәһеҙ, әлдә дәрес тамамланғанын белдереп, ҡыңғырау яңғыраны. Рәфис уҡтай тышҡа атылды. Партаһында асыҡ килеш ятып ҡалған дәфтәрендә тәүге өс һөйләм генә яҙылғайны...

## ТИШЕК КҮЛДӘК

— Ҡотло булһын! Йылы тәнеңдә туҙһын!

Әлиәгә ҡаланан ҡайтҡан ағаһы менән еңгәһе күлдәк бүләк иттеләр. Өҫ яғы шау сәскәле, ә итәге, ҡыҫҡа еңдәре бер төрлө алһыу төҫтә ине. Эй килешә үҙенә! Һалғыһы килмәй, оҙаҡ ҡына көҙгө алдында бөтөрөлдө. «Һаҡлап ҡына, байрам-фәләнгә генә кейерһең», — тигән әсәһен тыңларға ла теләмәне.

Өйҙә бер үҙе ҡалғас та күлдәгенә һоҡланып туя алманы. Әхирәттәренә күрһәтеп, маҡтанып алғыһы килде. Урамға күҙ һалыр өсөн тәҙрәгә атланы. Ҡаршылағы йорт алдында Миләүшә туп уйнап йөрөй ине.

Ҡыҙыҡай ҡыуанып китте. Асмалы тәҙрәнән сыға яҙып:

— Миләүшә, беҙгә ин! Мин һиңә бер нәмә күрһәтәм! — тип ҡысҡырҙы.

Күрше ҡыҙы, шуны ғына көткәндәй, йылп итеп килеп тә инде:

— Ҡайҙа, нимә күрһәтәһең?

Әлиә өр-яңы күлдәгенең итәген йәйеп тотоп, баҫҡан урынында зыр өйрөлөп алды. «Бына ошо-но» тигән ҡиәфәттә танауын күккә сөйҙө.

Миләүшә ауыҙын бәлшәйтте. Уның берәй ҡыҙыҡлыраҡ әйбер күргеһе килгәйне, ахыры. Күлдәк тә булдымы яңылыҡ.

Әммә Әлиә әхирәтен ебәргеһе килмәне. Шуға күрә йәһәт кенә хәйлә уйлап тапты:

— Ю-юҡ, ысынында мин һине уйнарға саҡырғайным. Әйҙә больница уйнайыҡ.



Миләүшә һөйөнөп риза булды. Ҡыҙҙар шкафтан бөтә медицина кәрәк-ярағын, дарыуҙарҙы алып теҙеп һалды. Хәл иттеләр: Әлиә — табип, әхирәте — сирле кеше.

Муйынына фонендоскоп таҡҡан, ҡулына градусник тотҡан «табип» «ауырыу»ға етди итеп ҡарап:

— Йә, нимәгә зарланаһығыҙ? Йүткерәһегеҙме? Температурағыҙ бармы? — тине.

Тик «ауырыу» икенсе төрлө яуап бирҙе:

— Мин ҡоланым. Бына ҡулымды һыҙырҙым.

Әлиә градусникты ситкә ҡуйҙы ла ҡул аҫтындағы әйберҙәр араһынан ниҙер эҙләй башланы. Бер аҙҙан, алтын тапҡандай, шат тауыш менән ҡысҡырып ебәрҙе:

— Бына бит ул «зелёнка»!

Ҡулына бәләкәй генә быяла һауыт тотҡан «табип» «яра»ны эшкәртергә булды. Мамыҡ таяҡсаны йәшел генә шыйыҡсаға манып алғас, «ауырыу»ҙың йәрәхәтенә төрткөләне. Унан тирәяғына ҡаранып, һауыттың ҡапҡасын эҙләне. Бәләкәй генә төймәсекте үрелеп алам тигәнсе, «зелёнка»ны күлдәгенә түкте.

Алһыу ерлектә ҙур булып йәйелгән тапты күреп, ике әхирәт бер мәлгә өнһөҙ ҡалды. Күп тә үтмәй, Әлиә сәрелдәп ебәрҙе:

— Күлдәгем! Күлдәгем!..

Тулҡынланыуҙан ул башҡа бер нәмә лә әйтә алманы, бер үк һүҙҙе ҡабатланы ла ҡабатланы. «Хәҙер нимә эшләргә? Бөгөн генә алғайнылар бит кейемде!»

Әхирәте шып-шым ине. Унының күлдәге түгел дә, барыбер Әлиәне йәлләне. Шунан йыуатырға теләп:

— Әйҙә, йыуайыҡ күлдәгеңде. Әсәйеңдәр ҡайтҡансы кибер әле, — тине.

Ысынлап та, өлкәндәр килгәнсе хатаны төҙәтергә кәрәк. Ҡыҙҙар эшкә тотондо. Һыу йылытып, тасҡа ҡойғас, байтаҡ ҡына кер йыуыу порошогы һалдылар. Күлдәкте батырып, теге хәйерһеҙ тапты ышҡый башланылар.

Ләкин, күпме генә тырышһалар ҙа, күлдәк таҙарманы. Кер һабыны алып та ышҡып ҡаранылар. Юҡ, бөтмәй бит, ә!

Аптырағас, Әлиә китап шкафынан «Файҙалы кәңәштәр» китабын алып аҡтара башланы. Кәрәкле теманы табып ҡысҡырып уҡыны: «Зелёнка» тамған әйберҙе марганцовкалы һыу менән йыуып бөтөрөргә мөмкин».

Дарыуҙар араһынан марганцовка эҙләп табып, һыуға һалды. Күберәк төшөп китте шикелле. «Ярай, яҡшыраҡ йыуылыр», — тип уйланы Әлиә һәм тасҡа күлдәген тығып, тағы ышҡыны.

Булмағас, булмай икән. Тап бөтөргә лә уйламаны. Бер саҡ Миләүшә белдекле ҡиәфәттә:

— Эй, онотоп та торам. Әсәй берәй нәмәне таҙартам тиһә, һыуға ағартҡыс өҫтәй ине, — тине.

Ағартҡысты ла тиҙ таптылар. Бер мәл йәшел тап бөттө. Бөттө лә... аҡҡа әйләнде.

Ҡыҙҙар берсә — күлдәккә, берсә бер-береһенә ҡараштылар. Инде иларлыҡ та хәлдәре ҡалмағайны уларҙың. Хәлдән тайып, иҙәнгә сүгәләнеләр.

Тауыш-тынһыҙ байтаҡ ултырҙылар шулай. Миләүшә үҙен үтә ғәйепле тойҙо. Ул бит ағартҡыс ҡулланырға тәҡдим итте. Шуға хәлде төҙәтергә теләп:

— Әйҙә, минең апайыма барайыҡ. Берәй юлын табыр әле, — тине.

Күңелһеҙ генә сығып киттеләр өйҙән. Бәхеттәренә, Гөләйфә өйҙә ине.

— Апай, ней... Әлиәнең күлдәге бысранғайны. Бөтмәй ҙә бөтмәй, — тине Миләүшә йәлләткес итеп.

Гөләйфә зыян күргән ерҙе диҡҡәт менән ҡараны. «Их, һеҙ, ишкәнһегеҙ ишәк сумарын», — тип күлдәкте ҡулында тегеләй-былай тулғандырып торҙо ла, Әлиәгә боролоп:

— Запас тауар киҫәге бармы бының? — тине. Бер нәмә лә аңламаған ҡыҙҙар аңшайып тора биргәс: — Ямау һала торғанын әйтәм, — тип өҫтәне. Унан, булмаҫ былдарҙан тигәндәй, күлдәктең тиҫкәре яғын әйләндерҙе. Урынында ине бәләкәй генә сәскәле тауар киҫәге.

Гөләйфә өҫтәл артына барып ултырҙы ла теген машинаһына тотондо. Ҡулдары оҫта уның.

Ҡыҙҙар ҙа өҫтәл янына йыйылышты. Әлиәнең генә һаман да ҡурҡыуы үтмәгәйне. Әле лә: «Ямау ямау инде. Һиҙмәҫтәр тиһеңме, күҙгә бәрелеп үк торасаҡ бит», — тип хафаланды.

Гөләйфәнең ҡулдарына күҙ эйәрмәне. Теген машинаһын зырылдатты ғына. Унан үтекләп тә ҡуйҙы. Күп тә үтмәне, ҡәнәғәт тауышы яңғыраны:

— Булды, ҡыҙҙар!

Күлдәктең итәген йәйеп һалыуы булды, Әлиә баяғы тап урынында матур сәскәне күрҙе. Килешеп тора бит әле уныһы. Әйтерһең, өҫкө яҡтағы шау сәскәле болондан берәүһе аҫҡа һикереп төшкән дә ирәйеп үҫеп ултыра. Бүлмә эсе шат ауаздарға сумды.

Бер аҙҙан Әлиә йырлай-йырлай өйөнә ҡайтып бара ине инде. Бәләнән баш-аяҡ тип, күлдәкте ҡабат кеймәне, яҙып ҡына артлы ултырғысҡа элеп ҡуйҙы. Ҡайтып ингән әсәһе итәктәге яңғыҙ сәскәне абайлап:

— Атаҡ-атаҡ, быныһы юҡ ине түгелме һуң? Әллә бая иғтибарлап ҡарамай, күрмәй ҡалдыммы икән? Картаям, ахыры, — тип һөйләнде.

Әлиә беренсе тапҡыр әсәһененең һуңғы һүҙҙәренә бошонманы. Һығып ҡосаҡлап, уны сикәһенән үбеп алды ла һикерә-ырғаңлай ҡаршылағы күрше йортҡа сығып йүгерҙе. Ҙур үҫкәс, тегенсе булырға ҡарар иткәйне ул.

## ҺЕМӘЙЕҮ

Самат бөгөн иртә торҙо. Бәй, был көн йылына бер генә тапҡыр килә бит. Мөмкин тиклем күберәк кешене кәкре ҡайынға терәтеп, тишек шоманға ултыртып ҡалырға кәрәк. Үпкәләштән түгел, йолаһы шулай.

Иң тәүҙә үҙенең игеҙәк туғанын һемәйтергә уйлап, йоҡлап ятҡан Азатты тәрткөсләргә тотонҙо:

— Азат! Азат! Фәниә апай сирләп киткән, бөгөн уҡымайбыҙ икән. Малайҙар менән йылғаға буйына төшөргә һөйләштек. Барырһың, мин китә торам.

Тегеһе күҙҙәрен берсә асып, берсә йомоп, «ыһы, ы-һы-ы» тип башын һелкте лә кире юрған аҫтына сумды. «Ышандымы, юҡмы? Ышанғандыр, йоҡоһонан айный алмай ятҡан кеше үҙен алдағандарын һиҙә тиме ни», — Самат, йәһәт кенә кейенеп, арлы-бирле ҡапҡылап алғас, ҡәнәғәт йөҙ менән ихатаға сыҡты.

Бер килке уйланып торғас, урамға күҙ һалды. Ана, хат ташыусы Зөбәйлә апай үтеп бара. «Әһә, белдем өләсәйҙе нисек алдарға!» Самат йүгерәтлай өйгә килеп ингән булды ла һөрәнләп ебәрҙе:

— Өләсәй! Зөбәйлә апай, пенсия килтерҙеләр, тип әйтергә ҡушты! Әле генә тарата алмайым, бик кәрәкһә, барып алһын, тине.

Ейәненең тауышынан тертләп киткән әбейҙең ҡулынан ҡалаҡтары төшөп, иҙәнгә сәселде. Үҙе: «Инде лә килтергәндәр икән. Күпме көтөргә була», — тип өтәләнеп йөрөп кейенде лә почта яғына ҡарай тәнтерәкләне.

Оло кешене улай юҡҡа ыҙалатыу яраған эш түгеллеген самалап, малай өләсәһе артынан урамға йүгереп сыҡты. Ҡайҙа ул! Кәрәк саҡта әбейең берәүҙе лә еткермәҫ — тыҡрыҡҡа бороп төшөп тә китте.

Самат ҡапҡанан кире инеүгә, мал һарайы ишегенән ҡулына бизрә тотҡан әсәһе күренде.

— Атаҡ-атаҡ, иртә менән ҡайҙа барҙың, улым? — тип аптыраны ул.

Алдарға уңайлы мәл тыуғанын һизгән малайҙың башынан төрлө уйҙар үтте.

— Ней, магазинға балыҡ килтергәндәр... Шуны бушатҡандарын ҡарап торғайным, — тине ул үҙенең яуабына хайран ҡалып. Вәт, баш! Вәт, тел! Хәҙер әсәһе магазинға йүгерәсәк.

— Алғанда һәйбәт булыр ине лә, аҡса юҡ бит әле, — тип көрһөндө әсәһе.

— Нишләп булмаһын, өләсәй пенсияһын алырға китте лә баһа, — шиғыр ятлаймы ни Самат, теле шартлап тора.

— Шулаймы ни? Ҡалай уңай. Хәҙер әтеү... — Әсәһе ҡабаланып өйгә табан атланы.

Балыҡ тип, ҡайһыныһын да алдаштырыуы ауырға төшмәҫ ине. Сөнки ғаиләләре менән балыҡ яраталар. Йәй көнө унан өҙөлмәйҙәр ҙә, әле юғыраҡ ваҡыт шул.

— Лә-лә-лә! — Самат урынында баҫып сыҙай алмай, һикергеләп бейеп тә ҡуйҙы. Күңеле күтәрелде. Ауыҙы йырылды. Көн башлана ғына, ә ул нисәмә кешене һемәйтергә өлгөрҙө.

Малай ҡәнәғәт йөҙ менән тирә-йүнде байҡарға тотондо. Ҡапыл ҡоймаға үрмәләгән бесәйҙәрен күреп ҡалды. Эйелеп, бер ус ҡар алды, уны йомарлап, эттәренә аш һалған ҡалай сеүәтәгә ырғытты:

— Барсик, Барсик! Бес-бес-бес! Мә-мә!

Бесәй йәшен тиҙлегендә ергә ырғыны, һикерәңләп сеүәтә эргәһенә килде. Уны еҫкәп-еҫкәп тә ашар ризыҡ таба алмағас, ҡойроғон болғай-болғай хужаһына ҡараны.

Самат урам яңғыратып көлөп ебәрҙе. Яҡындағы ағастан ҡарғалар осоп китте. Барсик солан аҫтына һыҙҙы.

Кәйефе булған малай, сираттағы ҡорбанын һағалап, тышҡа йүнәлде. Уйы — үрге осҡа барып әйләнеү. Дәрестәр башланырға байтаҡ ваҡыт бар әле.

Бер сәғәттән йүгерә-атлай ҡайтып килгән Саматҡа Азат тап булды.

— Сумкаң ҡайҙа? Мәктәпкә бармайһыңмыни? Һуңлайбыҙ бит! — тине ҡысҡырып Самат, Азатты алдағанын да онотоп.

— Фәниә апай район үҙәгенә киткән. Әсәй директор ағайҙы осратҡан, бөгөн дәрестәр булмай, тигән. Малайҙар менән йылға буйында йыйылабыҙ. Бар, ҡайта һалып балыҡ аша ла һин дә оҙаҡлама.

Самат, ишеткәндәренән аңҡы-тиңке булып, иҫен йыя алмай торҙо: «Фәниә апай... район үҙәгенә... Балыҡ... Ниндәй балыҡ? Эй, шилма, алдарға самалай. Юҡ инде...»

Өй ишеген асыу менән танауына балыҡ еҫе бәрелде.

— Әллә ҡайҙа йөрөйһөң? Кеше менән бергә ултырып әҙәм рәтле ашамаҫһың инде, — тип һуҡранып ҡаршы алды әсәһе. — Өләсәйеңдең пенсия аҡсаһына ике кило балыҡ алып ҡайттым. Ҡура һалып ашаныҡ. Тик Зөбәйлә генә оло башы менән «пенсия юҡ әле» тип шаяртып маташҡан. Балыҡты теге аҫҡы урамдағы төҙөүселәр магазинында һаталар тиһәң ни була бая? Атыу үҙебеҙ янындағыһына, Ғәйзулланыҡына, барып

йөрөнөм. Унының ла: «Төҙөүселәр магазинына балыҡ килтергәндәренә өсөнсө көн инде», — тип шаяртып тора. Бар, ҡулыңды йыу ҙа ултыра һал. Балыҡ таҫтамал менән ябылған тәрилкәлә. Мин эшкә киттем...

Самат шаңҡып баҫып тора бирҙе. Иҫенә килгәс, аш бүлмәһенә ыңғайланы. Өҫтәлгә яҡынлашты. Бына ул тәрилкә! Ауыҙ һыуҙарын ҡоротоп, тәмле еҫ таратып ултыра.

Аһ! Балыҡ ҡайҙа? Бер яҡ ситтә таҫтамал ята, уртала буш тәрилкә тора. Иҙән балыҡ ҡылсыҡтары менән тулған.

Самат башын күтәрҙе, аптыраулы ҡарашын бер әйберҙән икенсеһенә күсерҙе. Бер кем юҡ. Бер нәмә... Туҡта-туҡта, мейес артында ниндәй ут баҙлай һуң? Әллә... Теге...

— Барсик!!!

Малай бар көсөнә аҡырып ебәреүгә, ҡобараһы осҡан бесәй сығып ҡасты.

Самат, быуындары йомшарып, ултырғысҡа лып ултырҙы: «1 апрель... Алдаҡсы көн... Кем кемде һемәйтте һуң?..»

## НЫҠЫШ ҠЫҘ

Сәлиә, йоҡонан уянғас, һикереп тороп сәғәткә күҙ һалды. Иртә икән әле. Юҡ, сәғәтте белмәй ул әлегә. Ә уның бәләкәй уғы ҡайҙа ла өлкән уғы ҡайҙа торғанда төшкө өсөнсө ярты икәнен өләсәһенән һорашып ҡына алғайны. Сөнки өсөнсө яртыла мәктәптә дәрестәр башлана.

Ҡыҙыҡайҙың бер дәресте лә ҡалдырғыһы килмәй. Бер генә көн бармаһа ла, уҡытыусы иркен тын алып ҡаласаҡ. Былай ҙа Сәлиә ишектән күренеү менән уфтана ла:

— Тағы килдеңме ни? — тип ҡәнәғәтһеҙлек белдерә.

Юҡ, ҡыуып сығармай уны. Башҡалар кеүек, парта артына ултырырға рөхсәт итә. Башҡарған эштәрен тикшергән була. Ҡулын күтәрһә, баҫтыра, һөйләтә. Шунан журналды аса. Ләкин ручкаһын ситкә ҡуя ла, ҡәләм алып, исемлектең



иң аҫтында торған фамилияһы ҡаршыһына билдә сәпәй. Нимәһе ҡыуаныслы: гел «бишле»ләр унда.

Ә бөтә хикмәт Сәлиәнең мәктәп йәшенә етмәүендә. Сентябрҙә уның өс әхирәте беренсе синыфҡа барҙы. Уларҙан күрмәксе, сумка, форма, мәктәп кәрәк-яраҡтары алып биреүен үтенеп, йәй буйы әсәһенең теңкәһенә тейҙе. Шул хәтлем ныҡыштымы, өйҙәгеләр уның теләгенә күнде.

Уҡытыусы Ғәлимә апайҙары ла мөләйем генә ҡаршы алды. Ләкин тора-бара әсәһенең өйҙән ебәрмәҫкә, уҡытыусының синыф бүлмәһенә индермәҫкә тырышыуы һиҙелде. Баҡһаң, улар ҡыҙ бер аҙҙан ялҡып, мәктәпте үҙе ташлар тип өмөтләнгән.

Сәлиә, киреһенсә, уҡыуға сат йәбеште. Уны берәү ҙә мәктәп юлынан бора алманы. Әлдә уҡый белә ине. Ике туған ағаһының «Әлифба»һына талаша-талаша хәрефтәрҙе өйрәнгәйне. Шуға күрә, уҡытыусы ниндәй генә эш ҡушһа ла, еренә еткереп башҡарҙы. Йәшен, буйын иҫәпкә алмағанда, синыфташтарынан бер нәмә менән дә айырылманы.

Ауыл бәләкәй булғанлыҡтан, балалар аҙ ине. Ғәлимә апайҙары ла беренселәрҙе һәм икенселәрҙе бергә уҡытты. Бер синыф — бер рәттә, икенсе синыф икенсе рәттә ултырҙы. Сәлиә, бирелгән эште тамамлай ҙа, икенселәрҙең яуаптарын йотлоғоп тыңлар булып китте.

Бына бөгөн дә ул, һуңламаҫ өсөн, иртә менән мәктәпкә йыйынды. Икенселәрҙең белемен тикшерергә сит яҡтарҙан уҡытыусылар киләсәген ишеткәйне.

Дәрес башланғас, Ғәлимә апайзары беренселәргә хәрефтәр язырға кушты ла иғтибарын икенселәргә йүнәлтте.

— Балалар, бөгөн без һеззең менән ҡабатлау таблицаһын нығытып ҡуябыз. Йә, кемегез әйтә, ике икең нисә?

Икенсе рәттә ҡулдар күтәрелде. Ҡапыл Сәлиә ҡулын һондо. Уҡытыусы, аптырап:

— Нимә булды, Сәлиә? Сығаһың киләме әллә? — тине.

Ҡыз тороп басты ла:

— Дүрт, — тине.

— Нимә «дүрт»? — Ғәлимә апай аңламаны.

— Ике икең — дүрт.

Уҡытыусы бер мәлгә базап ҡалды, унан йылмайып:

— Афарин. Дөрөç. Ултыр, мин ҡушҡан эш менән бул, йәме, — тине.

Дәресте дауам итеп, ул икенселәргә тағы һорау бирзе:

— Өс өсөң нисә?

Сәлиәнең ҡулы был юлы ла барыһынығынан да юғарыраҡ күтәрелде.

— Тағы нимә булды?

Ҡыз һикереп тороп:

— Өс өсөң туғыз була! — тип ҡысҡырып яуапланы.

Инде бөтә уҡытыусылар за дәррәү көлөп ебәрзе. Сәлиә уңайһызланып ҡуйзы.

Ә иртәгеһенә синыф журналында Сәлиәнең фамилияһы юйылып, ручка менән киренән язып ҡуйылды. Өләсәһе быны белгәс, йөзөнә

ҡәнәғәтлек билдәһе сығарып: «Аҫыл һөйәк ҙур булмаҫ, ҡайҙа барһа — хур булмаҫ», — тине. Сәлиә был һүҙҙәрҙең мәғәнәһенә төшөнөп етмәһә лә, үҙенә ҡарата әйтелгән маҡтау, хуплау һүҙҙәре икәнен аңланы.

## ҠЫРАҒАЙ БЕСӘЙ БАЛАЛАРЫ

Һарай яғынан Мәүлиҙә апайҙың һуҡранған тауышы ишетелде:

— Һай, был йүнһеҙ малайҙарҙы! Нимә сыҡһа, шуларҙан сыға. Ҡош-ҡортто яфалауҙан башҡа шөғөлдәре юҡ...

Эштең нимәлә икәнен аңлаған Хәмит менән Хәлит өй соланы аҫтына инеп боҫто. Бая иртән, тауыҡтарҙың емен ашағастары, ялан кәртәләге турғайҙарҙы ҙур кәритә эсенә тоҡкайнылар. Уйынға әүрәп, кире сығарырға онотҡандар. Әле әсәләре быҙауҙарға һөт ҡоям тигәндер, моғайын...

Кисә лә эләккәйне үҙҙәренә. Уларҙың мал һарайы түбәһе аҫтында иркенлек. Аҫта һыйыр, башмаҡтар торһа, бында көҙҙән яҙғаса ерәй кәбәнлек ҡоро бесән һаҡлана. Малайҙар шунда уйнарға ярата. Йәшенмәк өсөн ҡулай был урын. Бесәнгә күмеләһең дә көтөп ятаһың. Әйҙә эҙләһендәр!

Өҫкә илткән баҫҡыс тапҡырында ғына, баш осонда, тимер ҡалай менән ябылған түбә аҫтында ҡарлуғастар оя яһаған ине. Ул виноград тәлгәшен хәтерләтеп, бейектә аҫылынып тора. Нисек ысҡынып китмәйҙер инде, ғәләмәт!

Хәмит менән Хәлиттең унның эсенә күҙ һалғылары килә, бәлки, йоморткалары ла барҙыр, әммә буй етерлек түгел. Улай итеп тә, былай итеп тә менерлек әмәл тапмағас, ҡоштарҙы күҙәтергә ултырҙылар. Бына ҡарлуғастар осоп килә лә суҡыштарындағы сыбыҡ-сабыҡты, үлән-фәләнде оҫта ғына итеп йәбештереп ҡуя. Оялары ҙурайғандан-ҙурая бара.

Ояның эсен ҡарағыһы килгән Хәмиттең башына хәтәр уй килде. Аҫта һарай стенаһына көрәкһәнәктәр һөйәп ҡуйылған ине. Малай төшә һалып бер һәнәкте алып өҫкә Хәлиткә һуҙҙы:

— Тот.

Хәлит, ғәжәпләнеберәк:

— Нимә эшләмәксе булаһың? — тип һораны.

— Күрерһең, — Хәмит баҫҡыстан тейен етеҙлегендә килеп тә менде. Шул ыңғайы һәнәкте эләктереп алып, аҫылынып торған ояға һуғып ебәрҙе. Тегеһе бирешмәгәс, тағы ла нығыраҡ төрттө. Оя ла таш түгел, ысҡынып китеп ергә осто.

Хәмит менән Хәлит тә һарай башынан һикереп төштөләр. Аяҡ аҫтында ятҡан оя буш ине. Малайҙар, ҡәнәғәтһеҙлек белдереп, берберенә ҡарашып ҡуйҙы. Буш оя уларға ҡыҙыҡ түгел. Күрәһең, ҡарлуғастар әле йомортҡа һалып өлгөрмәгән булған.

Ә кис көнө өйҙә буран ҡупты. Йорттарынан ҡолаҡ ҡаҡҡан ҡоштарҙың сыр-сыу килеп тауышланыуҙары өлкәндәр иғтибарынан ситтә ҡалманы. Кәртә эсендә ятҡан емерелгән оя ла табылды. Ныу эләкте лә малайҙарға! Йоҡларға ятҡансы

икәүһен баҫтырып ҡуйып, ҡарлуғастарҙың файҙаһы, ҡанатлы дуҫтарҙы, ғөмүмән, тере йән эйәләрен рәнйетергә ярамағанлығы тураһында нотоҡ уҡынылар.

Хәмит менән Хәлит баштарын эйеп, шым ғына тыңлап торҙолар, ҡош-ҡортҡа теймәҫкә вәғәҙә бирҙеләр. Ә бөгөн иртән тағы анттарын боҙҙолар. Шуға хәҙер йәшеренеп ултырырға мәжбүрҙәр.

Мәүлиҙә апай пыр туҙынып, һөйләнеп туҡтағас, малайҙар солан аҫтынан сыҡты. Әсәйҙәре һыуынғайны инде, шуға арлы-бирле әрләштереп алғас, йомош ҡушты:

— Барығыҙ, атайығыҙға төшкөлөккә ашарға алып барып килегеҙ. Таң һарыһынан аяҡ өҫтө көтөү артынан йөрөүе еңел тиһегеҙме...

Игеҙәктәр шатланып риза булды. Ҡыҙыҡһыныусан, бер урында ултырып сыҙай алмаған малайҙар төйөнсөктәрҙе йөкмәп ҡырға йүнәлде.

Көтөү һыулауға төшкәйне. Һыйырҙар эсеп туйғас, яттылар. Кәбир ағай ағас төбөндә ашъяулыҡ йәйеп ебәрҙе лә малайҙарын да табынға саҡырҙы. Улар ихлас риза булды. Яланда аш тәмле була бит ул!

Ҡапҡылап алғас, Хәмит менән Хәлит сәйҙән, һөттән бушаған шешәләрҙе алып йылғаға йүгерҙеләр. Ғәҙәттәгенән йылыраҡ булған яҙ ҡояшы аҫтында шешәләренән һыу сәсрәтә-сәсрәтә бер-береһен ҡыуыштылар.

Уйнап туйғас, Хәмит ниҙер күреп ҡалып, Хәлитте саҡырҙы:

— Кил әле, кил!

Хәлит аяҡ аҫтындағы яңы ғына тупраҡ өйөмөнә текәлде:

— Нимә ул?

— Һы, шуны ла белмәйһеңме ни? Һуҡыр сысҡандар ҡаҙған оя был. Ана, күрәһеңме, күп улар бында, — Хәмит белдекле ҡиәфәттә туғанына ҡарап алды.

Икәүләшеп өң тишеген һағаларға ултырҙылар. Ләкин күпме көтһәләр ҙә, бер сысҡан да күренмәне. Инде ялҡа башлаған Хәмит бер мәл:

— Белдем! — тип ҡысҡырып ебәрҙе. — Әйҙә, өңгә һыу ҡояйыҡ. Тонсоғоп, сысҡан сығып ҡасасаҡ.

Хәлит үҙенең башлы игеҙәгенә көнләшеп ҡарап ҡуйҙы. Уның башына бер уй килгәнсе, туғаны өс-дүрт тәҡдим индерә.

Малайҙар шешәләренә тағы ла һыу тултырып алып килеп, тишектәргә ҡоя башланы. Дөрөҫ әйткән Хәмит, тонсоғоп үлгеһе килмәгән кимереүселәр өңдәренән атылып сығып тырым-тырағай ҡасырға тотондо. Сыр-сыу килеп уларҙы баҫтырып йөрөгән бәләкәй хулигандарҙы аталарының асыулы тауышы туҡтатты:

— Ай, тыңлауһыҙҙар! Ниңә хайуандарҙы йонсотаһығыҙ?

Шөрләп ҡатып ҡалған малайҙарҙың ҡулынан шешәләрен тартып алып, өйгә ҡайтырға бойорҙо. Игеҙәктәр баштарын эйеп, ғәйепле ҡиәфәттә ауылға ҡарай атланы.

Әммә тиктормаҫ Хәмиттең өйгә ҡайтҡыһы килмәй ине. Туғанына ҡарап:

— Әйҙә, урман буйлап йөрөп киләйек. Ҡыҙыҡ бит. Барыбер атай кис кенә ҡайтасаҡ, белмәй ҙә ҡалыр, — тине.

Хәлит теләр-теләмәç кенә эйәрҙе. Былай ҙа Хәмит арҡаһында уға ла эләгә гел генә. Берәй эш боҙһа, яза тағы уртаҡ буласаҡ.

Йылға аша сығып, тау битләүе буйлап киттеләр. Ҡаянан ҡаяға менә торғас, урман да ҡуйыра төштө. Хәлит ҡурҡа башланы. Хәмиттең еңенән тартып:

— Ҡайттыҡ, алыç киттек шикелле, — тине.

Яуап бирәһе урынға Хәмит бармағын ирененә терәне:

— Тс-с... Ҡара әле тегендә.

Һөҙәк кенә һыртта, йыуан ағас төбөндә, ике бесәй балаһы уйнап йөрөй ине. Кәүҙәгә эре генәләр. Ҡолаҡтары ғәҙәттәгенән бер аҙ ҙурыраҡ һәм ослораҡ. Ҡойроҡтары, киреһенсә, ҡыçҡа һәм тумпыш.

Малайҙар аптырап, шымып ҡалды. Ҡайҙан килгән бында бесәй балалары? Ауылға йыраҡ, тирә-яҡта шырлыҡ.

— Берәйһе аҙаштырырға тип килтереп ташлап киткәндер. Артыҡ тамаҡты кеше шулай итә бит ул, — тине Хәмит шыбырлап ҡына. Шунан башына шәп уй килгәндәй йөҙөнә шатлыҡ ғәләмәте сығарҙы: — Алып ҡайтайыҡ үҙҙәрен. Әсәйҙәр гел, ҡош-ҡортто яфалайһығыҙ, ти ҙә тора. Бер изгелек эшләйек.

Хәлит уның һүҙҙәрен йөпләргә ашыҡманы:

— Яраймы һуң икән уларҙы алып ҡайтырға? Атай, тәбиғәткә ҡыçылмағыҙ, һәр бөжәктең, һәр йәнлектең үҙ урыны, үҙ файҙаһы бар, ти бит. Әлләсе...

Хәмит йылмайҙы:

— Ниндәй ҡыҫылыу, ти, ул тәбиғәткә. Барыбер урманда үләсәктәр. Һуң былар бит бесәйҙәр. Ҡурҡһаң, мин үҙем...

Туғанының ҡулынан тотоуына ҡарамаҫтан, алға атланы. Уның менән бесәй балалары араһы ҡыҫҡарғандан-ҡыҫҡарҙы. Хайуанҡайҙар малайҙың яҡынлашҡанын һиҙмәй уйнауын дауам итте. Ҡапыл артта: «Һай! Һай!» — тип ҡысҡырып сыбыртҡы шартлатҡан тауыш ишетелде. Хәмит туҡтап, әйләнеп ҡараны. Әле генә килгән яҡтан уларға ҡарай аталары йүгерә ине. Үҙе ныҡ итеп ҡысҡыра, бер туҡтауһыҙ сыбыртҡы менән һелтәнә. Ул арала теге бесәй балалары урман араһына инеп юғалды.

Йыш-йыш тын алыуҙан бер һүҙ әйтә алмай, йөҙө үҙгәреп, ағарынған атаһы килеп тә етте, улының елкәһенән бөрөп эләктереп тә алды. Унан яурынынан матҡып тотоп ҡолағы төбөндә ҡысҡырҙы:

— Аһ, һин, малай аҡтығы! Беләһеңме нимә эшләгәнеңде, ҡайҙа китеп барғаныңды?! Беләһеңме үҙеңде нимә көткәнен?!

Хәмит аптырап, күҙҙәрен асҡылап-йомғолап тик торҙо. Бер нәмә лә аңламаны, ярамаған нимә эшләне һуң ул?

Атаһы тынысланғас, йомшарып:

— Былар бит һеләүһен балалары! Улар гәмһеҙ генә уйнап йөрөһә лә, инәләре һаҡлап-һағалап ята. Барып етеп, балаһын ҡулыңа алыу менән ағас башынан өҫтөңә һикерер ине. Ярай, белгән кеүек артығыҙҙан күҙәтеп килеп, аралап ҡалырға өлгөрҙөм. Ахмаҡтар...

Хәмит менән Хәлит шунда ғына аңланы үҙҙәренә нимә янағанын. Былтыр шулай һеләүһен башмаҡтарын тәләфләгәйне. Хәмиттең аяҡтары тотмай, бөтә тәне дерелдәп китте. Ысын ҡурҡыу солғап алды үҙен. Атаһының: «Барығыҙ, һыпыртығыҙ өйгә!» — тигәнен ишетеү менән ауыл яғына ҡарай йүгерҙе. Хәлитте лә еткермәне хатта.

«Нисек булды һуң әле? Турғайҙарҙы тотоп бикләне. Ҡарлуғас ояһының башына етте. Һуҡыр сысҡандарҙы сыйылдатып йөрөтөп баҫтырҙы. Ә бесәйҙәр саҡ-саҡ уның үҙенең башына етмәне. Тәбиғәт барыбер кешенән көслөрәк икән. Ҡоштар менән йәнлектәрҙе ҡыйырһытырға ярамай. Һин уларға ниндәй ҡараштаһың, һиңә лә улар шулай яуап бирә, тимәк».

Ҡайтып еткәнен дә һиҙмәй ҡалды Хәмит. Өйгә ингәс, барып китап шкафынан хайуандар тураһындағы энциклопедияны алды. Диванға йәтешләп ултырып, беренсе битен асты. Шул саҡ үҙенә төбәлгән ҡарашты һиҙеп, башын күтәрҙе. Ишек төбөндә күҙҙәре баҙлап янған бесәйҙәре ултыра ине. Малайҙың арҡа һөйәге сымырлап китте.

Башҡа ваҡытта Хәмит аяҡ аҫтында уралған бесәйҙәрен тибеп кенә осора ине. Әле тороп, һауытына һөт ҡойҙо, янына ит киҫәктәре һалды. Эстән генә: «Һы, ул да ҡасандыр ҡырағай булған бит», — тип уйланы. Үҙе ҡабаланмай ғына тамаҡ туйҙырған йән эйәһенә яратып, хөрмәт менән ҡараны.

## ӘФЛИСУН ТӘМЕ

Ана, оҙон урамдың түбәнге осонда бер ҡара нөктә пәйҙә булды. Ул ҙурайғандан-ҙурая барып, бер нисә минуттан ҡәҙимге ҡатын-ҡыҙ һынына әүерелде. Ҡулында ниндәйҙер төйөнсөгө лә бар, ахыры.

Ошо мәл яҡындағы мөһабәт йорттоң һырлап, биҙәкләп эшләнгән ҡапҡаһына һөйәлеп торған тумалаҡ ҡына кәүҙә хәрәкәткә килде: ваҡ-ваҡ атлап туҙанлы юл уртаһына сыҡты, төймәләй түңәрәк күҙҙәрен мөлдөрәтеп ҡаршы килеүсегә төбәлде. Был аҡһыл сәсле, түңәрәк йөҙлө, йәмшек танаулы биш-алты йәштәрҙәге ҡыҙ бала ине.

Төйөнсөклө ҡатын яҡынайған һайын, ҡыҙыҡайҙың йөҙө һытылырҙай булып йәмрәйә, алһыу ирендәре бәлшәйә барҙы. Көслө ямғыр алдынан ғына була торған шомло тынлыҡ урынлашты. Бына, гүйә, ҡара болоттар бергә уҡмашты ла, көсөргәнешкә сыҙай алмай, ямғыр һыуҙарынан ҡотолорға булды — ҡыҙый: «Ул түгел!» — тип ҡысҡырып илап ебәрҙе.

Ҡатын аҙымдарын ҡыҙыулатты. Ҡыҙ янына еткәс, сумкаһын ергә ҡуйҙы. Сүгәләп, ҡыҙыҡайҙы ҡосағына алды, сәстәренән һыйпаны:

— Нимә булды, Гөлиә?

Гөлиә танауын мыш-мыш тартты:

— Әсәйем ҡайтмай ҙа ҡайтмай.

— Илама, йәме. Ҡайтыр әсәйең. Көткән кеше ҡасан да булһа бер ҡайта ул.

Ҡатын, нимәнелер иҫенә төшөргәндәй, йөҙөн йыйырҙы ла ҡабаланып сумкаһын аҡтарырға то-



тондо. Унан ҙур ғына әфлисун алып ҡыҙыҡайға һондо. Тегеһе күстәнәсте алып кеҫәһенә йәшерҙе.

— Быңдай мәмәйҙе ашағаным бар инде. Өләсәйемдән әрсетеп алайым әле, — тип аллы-гөллө күлдәген ялпылдатып өйөнә ҡарай йүгерҙе.

Ҡатын ҡыҙыҡай семәрле ҡапҡа артына инеп юғалғансы ҡарап торҙо ла юлын дауам итте. «Бала — бала инде», — тигән һүҙҙәре генә ишетелеп ҡалды.

Ҡыҙыҡай һикәлтәләрҙән осоп тигәндәй мендә лә ашығып өйгә инде. Түрбашта ҡыштырлап йөрөгән өләсәһе янына барып, әфлисунды һуҙҙы:

— Әрсеп бир әле.

Өләсәһе эшенән айырылып:

— Кем бирҙе? — тип һораны.

— Азаматтың әсәһе.

Ул арала «ах» та «ух» килеп ике туған ағаһы Дамир килеп инде лә тупһанан уҡ һөрәнләп ебәрҙе:

— Минең дә тәмлекәс ашағым килә!

— Юҡ, бирмәйем! — Гөлиә әрселеп тә бөтмәгән һары йомарламға сат йәбеште һәм тышҡа атылды. Асыҡ ишектән өләсәһенең һуҡранғаны ишетелеп ҡалды:

— Юҡҡа талашаһығыҙ. Бер алманы бишкә бүләйек тигән халыҡ. Татыулыҡ булмаған өйҙә бәхет тә урап үтә...

Гөлиә күтәрмәгә сыҡты. Аяҡтарын бөкләп иҙәнгә ултырҙы ла әфлисунға тешен батырҙы. Абау, шул хәтлем дә әсе булыр икән дәһә! Йөҙө сырылды, күҙенән йәштәр бәреп сыға яҙҙы. Ахыры, күстәнәсте яҡында йөрөгән тауыҡтарға ырғытты.

Әсәһе... Ҡыҙҙың тағы ла кәйефе төштө. Ҡасан ҡайта инде ул? Ниңә оҙаҡлай? Ҡайтып, берике көн торғас, тағы ла һары автобус алып китерме икән үҙен? Ҡыҙыҡайҙың кескәй йөрәге һулҡылданы. Мейеһен төрлө уйҙар быраулаңы.

Гөлиә әсәһен күҙ алдына баҫтырҙы. Һәйбәт уның әсәһе. Уны алдына ултыртып, сәстәренән һыйпап иркәләгәне гел иҫендә. Шундай рәхәт була торғайны! Әлбиттә, Гөлиәне өләсәһе лә, ағаһы ла бик ярата. Ҡаҡҡан-һуҡҡандары юҡ былай. Киреһенсә, «беҙҙең өйҙөң йәме һин» тигән булалар. Берәй эш боҙғанда ла өләсәһе аяҡ тибеп: «Ах, һин шайтан ҡыҙ!» — тип юрый ғына ҡурҡытҡан була. Тәм-томдо ла йәлләмәй, кейемдең дә иң аҫылдарын алып бирә. Ә ағаһына ул былай ҙа бирешмәй.

Шулай ҙа өләсәһенең арҡаһынан тупылдатып һөйөүе әсәһенең: «Себешем, күҙ нурым һин минең», — тип иҙәп кенә күкрәгенә ҡыҫыуына етмәй. «Күҙ нурым» тигәне ҡалай булалыр уның, әммә барыбер рәхәт. Әсәһенең мәңге моңһоу күҙҙәре лә уға иң матурҙары кеүек тойола. Бөтәһе лә һылыу һанаған күрше апайҙың зәңгәр күҙҙәре сүп кенә ул әсәһенекеләр янында.

Тик ниңәлер өләсәһе генә өнәп етмәй әсәһен. Үҙ алдына ла: «Әйттем мин уға, тыңламаны. Әйҙә, теләһә нимә эшләһен. Бынан һуң изгелек көтмәһен минән», — тип мыңғырлап тик йөрөй. Шул саҡ Гөлиәнең әсәһен яҡлап әллә ниҙәр өндәшкеһе килә, әммә шөрләтә шул. Өләсәйгә ҡаршы һүҙ әйтеп ҡара! Әсәһе ҡайһы саҡ битәрләүҙәргә түҙмәй һығылып илап ебәрә.

Уның урыҡ-һурыҡ һүҙҙәренән Гөлиә бер нәмә лә аңламай. Әллә өләсәһен, әллә башҡа берәүҙе, әллә был донъяны ҡәһәрләй...

Их, атаһы булғанда, бәлки, икенсе төрлөрәк йәшәрҙәр ине. Ана, күрше ҡыҙы: «Атайыма әйтәм!» — тип кенә ҡурҡыта ла ҡуя малай-шалайҙы. Атайҙан шулай бөтәһе лә шөрләйҙәрҙер инде. Гөлиәнеке булмағас, унынһын белмәй. Дөрөҫөрәге, бар ине уның да атаһы. Әҙ-мәҙ иҫләй ҙә әле үҙен.

Их, атаһы булһа ине уның да. Ҡыҙын етәкләп урамға алып сыҡһа, бөтә кешенең күҙе дүрт булыр ине: «Гөлиәнең дә атаһы бар икән дәһә».

«Шығыр-р!» Сеү, ҡапҡа асылды түгелме һуң? Ҡыҙыҡай һикереп тороп тауыш килгән яҡҡа ынтылғайны, асыҡ тәҙрәнән: «Артыңды яба һал! Күрмәйһеңме, быҙау инеп килә! Сәскәләремде тәләфләтеп бөтөрәһең инде», — тигән һуҡраныу һүҙҙәрен ишетеп, урынында ҡатып ҡалды.

Бына ҡапҡа ябылды. Аяҡ тауыштары яҡынлашты. Күмәктәр шикелле. Берәүһе тыҡ-тыҡ итеп йыш-йыш баҫа, икенсеһе ауыр атлай. Хәҙер — бороло ш! Гөлиәнең йөрәге дөп-дөп типте. Ах, был түҙемһеҙлек!

— Әсәй!!!

Ҡыҙыҡай күтәрмәнән түбән ташланды. Ул әсәһенең көләс йөҙөн бер генә секундҡа күреп ҡалды — ҡәҙерле йәнде һыға ҡосаҡлап, күҙҙәрен сытырлатып йомғайны. Йылы, мамыҡ кеүек йомшаҡ ҡулдар уның ҡыҫҡа сәстәрен туҙғытты, гәлсәр һауытты төшөрөп ебәреүҙән ҡурҡҡандай, һаҡ ҡына тумалаҡ кәүҙәне үҙенә ҡарай тартты.

— Ҡайттыңмы, әсәй?

— Ҡайттыҡ, ҡыҙым.

«Ҡайттыҡ? Бәй, быныһы кем тағы?» Бала күҙҙәре бер аҙ ҡыҙыҡһынып, бер аҙ шомланып таныш түгел кешегә төбәлде. Ир кеше йылмайҙы, әммә ҡыҙыҡайҙың шик-шөбһәһе таралманы. Гөлиә әсәһенә һораулы ҡараш ташланы.

Әсәһенең тауышы көсһөҙ генә сыҡты:

— Ҡыҙым, был һинең атайың...

Тынлыҡ урынлашты. Бер аҙ ваҡыт бала һәм ир бер-береһенә ҡарашып торҙолар. Гөлиә атай тейешле кешене баштан-аяҡ тикшереп сыҡты. «Ысын минең атайыммы? Һуң ул бейегерәк түгел инеме ни? Йөҙө лә башҡасараҡ кеүек. Әллә тағы...»

Ҡыҙыҡайҙың үтә етди йөҙөн күреп, өлкәндәр бер-береһенә борсоулы ҡараш ташланы. Хатта уларҙа ҡурҡыу ғәләмәте лә сағылып киткәндәй булды. Гөлиә бер аҙым алға атланы. Ир кеше тертләне, ҡалтыранған ҡулдарын ҡайҙа ҡуйырға ла белмәне. Әсәһе, ниҙер әйтергә тип, ауыҙын асҡайны, ҡыҙыҡай: «Мин һине башта уҡ таныным», — тип саҡ ишетелерлек итеп шыбырланы ла ҡаршыһындағы ирҙе барып ҡосаҡланы. Ҡаушауын еңеп, ул баланы күтәреп алды, күкрәгенә ҡыҫты. Шунан атаһы уны ергә төшөрҙө. Ҙур ҡара сумканы асып, Гөлиәгә бер полиэтилен тоҡ әфлисун тотторҙо. Ҡыҙыҡай тоҡсайҙан бер бөртөк емеште алыуға, өй ишегендә өләсәһе күренде. Ҡайҙандыр йылп итеп Дамир ағаһы килеп сыҡты:

— Миңә лә, миңә лә бир!

Гөлиә тырышып-тырмашып әфлисунды әрсеп, һаҡлыҡ менән генә өлөштәргә бүлде лә барыһына ла таратып сыҡты. Иң һуңғы өлөштө үҙе ҡапты. Өләсәһе менән ағаһы ла, әсәһе менән атаһы ла ҡәнәғәт булып йылмайыштылар.

Гөлиәгә лә рәхәт булып китте. Әфлисунды ләззәтләнеп һура-һура: «Һы, бер ҙә әсе түгел дәһә», — тип уйланы.

## ЗАПАС ТӘГӘРМӘС

Йәйге ялды ҡаланыҡылар ғына көтөп алмай. Бына Рөстәмдәрҙең ауылға ҡайтыуына иң һөйөнгәне атаһының бер туған ҡустыһы Иштуған булды. Атай йортонда бер үҙе донъя йөгөн тартҡанға ла түгел. Хәйер, йәшерен-батырыны юҡ, йәй һайын ауылда ҡала ҡунаҡтарын түҙемһеҙләнеп көтөп алалар. Сөнки тауыҡ сүпләһә лә эш бөтөрлөк түгел унда: йәшелсә-емеш үҫтереүме, картуф утап-күмеүме, бесән сабып-йыйыуымы тигәндәй...

Шулай ҙа һиҙә Рөстәм, ағаһы һөйләшер-аралашыр кеше ҡайтҡанына ныҡ ҡыуана. Бигерәк туған йәнле шул үҙе.

Әле лә ағаһы менән еңгәһенә, Рөстәм менән ҡустыһы Илнурға: «Рәхәтләнеп йоҡо туйҙырып, мунса инеп, нервыларығыҙҙы тынысландырып алығыҙ. Бер аҙ бушағас, үҙем һеҙҙе ҡырға алып сығырмын. Усаҡ яғып, шашлыҡ ҡурып күңел асып алырбыҙ. Бала, йәш саҡтарҙы иҫкә төшөрөп. Хәтерләйһеңме, ағай, тау башында иҫке

тәгәрмәстәрҙе өйөп ут яҡҡандарҙы? Уларҙың сытырлап-сытырлап янғандарын?» — тип йыш ҡабатланы.

Ҡаланыҡылар йоҡо ла туйҙырҙы, мунса ла инде. Рөстәм түҙемһеҙләнеп ҡырға сығыуҙы көттө. Шашлыҡ ашағаны бар инде уның ҡалалағы байрамдарҙа ла. Ә бына усаҡ яғыу! Етмәһә, іҫке тәгәрмәстәрҙе яндырыу! «Шулай шәп янамы икән улары? Ағаһы бушҡа ураған һайын іҫенә төшөрмәйҙер быны. Их, тиҙерәк күрер кәрәк ине ул ымһындырғыс усаҡты!»

Иштуған ағаһы эш буйынса улай ҙа сапты, былай ҙа сапты. Өйҙәгеләр ҙә буш ятманы. Атаһы кәртә-ҡура төҙөкләндерҙе, әсәһе өй йыуҙы. Ҡустыһы күрше малайҙары менән дуҫлашып алды.

Рөстәм генә толҡа тапманы. Ҡасан усаҡ яғабыҙ, тип өлкәндәрҙең теңкәһенә тейҙе. Яҡындағы тау башына күҙ һалып-һалып алды. Бер юлы ҡапҡа эсендә, кәртә арттарында кәрәге бөтөп ятҡан тәгәрмәстәрҙе эҙләне. Үс иткәндәй, улары ла күренмәне.

Бер көн сабырлығын юйҙы. Ҡустыһын саҡырып алып:

— Иштуған ағай ҡасан бушай әле. Әйҙә, үҙебеҙ генә усаҡ тоҡандырып ҡарайыҡ. Тәгәрмәс табып, уның нисек янғанын да тикшерербеҙ бер ыңғай, — тине.

Илнур ғәжәпләнеберәк:

— Ә ҡайҙан алырбыҙ һуң ул тәгәрмәсте? — тине.

Рөстәм бер нисә секундҡа уйға ҡалды. «Өлкәндәрҙән һорашһаң, фәтүә булмаҫ. Әрләп, бөтөнләй

тыйып ҡуйырҙар. Ә Илнурҙың теге дуҫтарынан белешһәң?»

Шулай иттеләр ҙә. Әммә күрше малайҙарының да ярҙамы теймәне. «Әлләсе, тәгәрмәс яҡҡан кеше күренмәй ул хәҙер», — тиеүҙән уҙманылар.

Рөстәм артҡа сигенергә теләмәне. Алдына алғанын эшләмәйенсә туҡтамай ул, ғәҙәттә. Тәгәрмәс кенә тапһын әле...

Һәр кем үҙ шөғөлө менән булған арала, берәүгә лә һиҙҙермәй генә ауылды урап сыҡты малай. Картуф баҡсалары арттарын тикшерҙе. Йылға буйын ҡыҙырҙы. Исмаһам, бер ташландыҡ тәгәрмәс булһасы! Юҡ шул.

Арып, асығып ҡайтып килешләй өй алдындағы баҡса буйында торған эскәмйәгә сүгәләне. Һуңғы көндәрҙә гел генә эҙләнеп йөрөгәс, ғәҙәтенсә, урамды байҡап алды. Ҡапыл ҡарашы ҡапҡа алдында торған ағаһының машинаһына төштө. Дөрөҫөрәге, уның арт яғындағы запас тәгәрмәс ҡуя торған йомро ҡумтаға. Белә ул, уның эсендә бар эҙләгән әйбере. Тик тейергә ярамағанлығын да белә, бигерәк тә рөхсәтһеҙ. «Шулай ҙа шым ғына ысҡындырғанда? Бәлки, һиҙмәҫтәр ҙә. Барыбер кәрәге тейгәне юҡ бит әле».

Тыйып тора алманы үҙен Рөстәм. Күҙ алдына дөрләп янған ҙур усаҡты килтерҙе лә машинаға ҡарай атланы. Тиҙ генә аса алманы түңәрәк ҡумтаны. Ә тимер келәне ысҡындырғас, тәгәрмәсте һөйрәтеп төшөрөүе үҙе бер ыҙа булды. Ауыр ғына икән дәһә!

«Хәҙер ҡайҙа ҡуйып торорға уны? Ихатаға индерһәң, өйҙәгеләр күреп ҡалыр. Ә-ә, белдем». Рөстәм тәгәрмәсте тәгәрәтеп баҡсаға индерҙе. Нигеҙ буйында үҫеп ултырған алабута, кесерткән араһына йәшергәс, тирә-яғына алан-йолан ҡараны. «Уф, берәү ҙә күрмәне шикелле».

Иртәгеһенә иртән Иштуған ағаһы йомош менән ҡалаға юлланды. Ата-әсәһе артҡы яҡҡа картуф күмергә сыҡты. Кеше аяғы һил булғас, Рөстәм күршеләрҙән ҡустыһын саҡырып алды.

— Әйҙә, тау башына усаҡ яғырға барабыҙ. Тәгәрмәс мендерешергә ярҙам итерһең, — тине ул шыпырт ҡына.

Илнур теләр-теләмәҫ кенә эйәрҙе. Бер арала иптәштәренә ҡайҙа киткәндәрен шыбырлап, тиҙҙән килергә вәғәҙә биреп өлгөрҙө.

Шыбыр тиргә батты малайҙар тауға артылып. Ләкин кире сигенмәнеләр. Рөстәм уйлағанын еренә еткерергә теләне, ә Илнур ағаһының асыуланыуынан ҡурҡты.

Ниһайәт, түбәгә менеп еттеләр. Ҡоро-һары ағас йыйып килтереп, ут тоҡандырып ебәрҙеләр. Унан тағы утын өҫтәнеләр.

Рөстәм тәгәрмәстең дискыһын ысҡындырырға маташып ҡараны. Ҡайҙа ул! Шунан Иштуған ағаһы ләззәтләнеп һөйләгән мәлде көтөргә ултырҙы. Тәгәрмәстең янырға ҡабаланмағанын күреп, өйҙән кеҫәһенә һалып алған бәләкәй быяла шешәне сығарҙы. Бензин ине уның эсендә...

Илнур яҡындағы ағаслыҡҡа ҡарай атланы. Уға ҡыҙыҡ түгел ине, буғай. Малайҙың тиҙерәк иптәштәре янына ҡайтҡыһы килде. Тик аға-

һының рөхсәтенән тыш башбаштаҡланырға шөрләне. Шуға күрә көтәүелләберәк тегеләй-былай йөрөштөргөләне.

Ҡапыл ҡот осҡос шартлау яңғыраны. Илнур усаҡ яғына әйләнгәндә ағаһы ерҙә салҡатан ята ине. Янына йүгереп барыуға Рөстәмдең ҡарайған йөҙөн, ә кәүҙәһенең ҡыбырламағанын күреп, ҡурҡып ҡысҡырып ебәрҙе. Теге тәгәрмәстән бер нәмә лә ҡалмаған. Дөрөҫөрәге, усаҡтан байтаҡ алыҫта яланғас дискы ғына ята ине.

Илнур ауылға йүгерҙе. Әллә ни алыҫ китеп өлгөрмәне, ҡаршыһына атлаған ата-әсәһен, Иштуған ағаһын һәм күрше малайҙарын тап итте. Баҡһаң, ярты юлда ағаһының машина тәгәрмәсе тишелә. Ә запас тәгәрмәстең юҡлығын күреп ҡалғас, бөтәһен дә аңлай һәм кире борола. Күрше малайҙары иһә Рөстәм менән Илнурҙың тауға киткәндәрен дәлилләй.

...Рөстәм күҙҙәрен асып ебәргәс, бер нәмә лә аңламаны. Ҡарашы ап-аҡ түбәгә төштө. Битенең, ҡулының үлтерә яҙып һыҙлауын тойҙо. Янында кемдеңдер илап ебәргәнен ишетеп, көс-хәл менән башын борҙо. Әсәһе икән. Артында Иштуған ағаһы баҫып тора.

— Эй, улым, нимә генә эшләнең һин?.. — Әсәһенең аҙаҡҡы һүҙҙәре илау-һыҡтау эсендә батты.

Рөстәм саҡ телен әйләндереп:

— Тәгәрмәс... Запас тәгәрмәс... — тине.

Иштуған ағаһы, һөйләшергә ярамай тигәнде аңлатып, бармағын ирененә яҡын килтерҙе лә:

— Борсолма тәгәрмәс өсөн. Баш һау булһа, һатырбыҙ ҙа алырбыҙ. Запас тәгәрмәс бит ул. Ә бына һаулыҡты һатып алып булмай. Ярай, күҙҙәреңә зыян килмәгән. Яраларың төҙәлер. Төҙәлгәс тә тау башына менеп, усаҡ яғырбыҙ. Вәғәҙәмде һуҙа торғас, бына нимәгә килтереп еткерҙем, — тине асырғанып.

Рөстәм өндәшмәй генә баш һелкте. Ысынында уның хәҙер усаҡ яҡҡыһы килмәй ине. Өлкәндәрҙең һүҙен тыңламай, белмәгән эшкә тотонорға ярамағанлығын ғына аңларлыҡ булғайны инде ул.

## ИҢ ЕҢЕЛ СПОРТ

Илһам спортсы булырға ҡарар итте. Кисә телевизорҙан күрҙе: олимпиадала миҙал яулаған ағай-апайҙарға президент ордендар таҡты, машина асҡыстары тапшырҙы. Уларҙы саҡ ҡына алдараҡ аэропортта сәскәләр тотоп ҡаршыланылар, хатта ҡайһы берәүҙәрен күккә сөйөп-сөйөп алдылар. Вәт рәхәт, вәт хөрмәт спортсыларға!

Теләген олатаһына әйтте. Ата-әсәһенә өндәшеүҙән файҙа юҡ — мәңге бушамайҙар. Ә олатаһымы... Ул, ғәҙәттә, тәүҙә иғтибарлап тыңлай, унан берәй аҡыллы кәңәшен бирә.

Был юлы ла шулай булды.

— Спортсы, тәк спортсы. Һинең йәшеңдәге малайҙарға иң ныҡ оҡшағаны футбол була торған. Бөгөн шылтыратып-маҙар белешеп ҡуйырмын

ҡайҙа йөрөүе ҡулайыраҡ булырын. Күнекмәләр теҙмәһен белгәс тә барырбыҙ, — тине һалмаҡ ҡына тауыш менән.

Киттеләр иртәгеһенә стадионға. Туп типкән үҙе буйы ғына малайҙарҙы күреп күҙе янды Илһамдың. Олатаһының: «Туҡта-туҡта...» — тигәненә ҡолаҡ та һалмай майҙансыҡ уртаһына йүгерҙе.

Биш минут та үтмәне, үсеккән төҫ менән кире килде.

— Нимә булды, улым? — тине борсолоп олатаһы.

— Эй, ней туп бирмәйҙәр, ней аяҡҡа тибәләр. Оҡшамай миңә бында, ҡайттыҡ.

— Йә инде, улай ғына була торған. Футбол — ысын ир-егеттәр уйыны. Әҙ-мәҙ сыйылған, күгәргән урындар бүстәк бит ул, — тип йыуатты оло кеше.

— Юҡ, бүтән төрлө спорт менән шөғөлләнәм. — Үҙ һүҙен бирмәне малай.

Ике көндән олатаһы Илһамды өйҙәренән алыҫ түгел спорт мәктәбенә алып китте. Бында каратэ буйынса махсуслашҡандар икән. Зал тулы малайҙар, араларында ҡыҙҙар ҙа күренә. Парлашып бер-береһе менән көс һынашып йөрөйҙәр. Дәғүәселәренә һуҡҡан һайын: «Йа!» — тип ят өндәр сығарып-сығарып алалар.

Илһамға бигерәк тә кейемдәре оҡшаны уларҙың. Ҡыҫҡа ғына аҡ халатты кемдер — һары, кемдер йәшел билбау менән быуып алған. Барыһы ла аҡ ыштандан, ялан аяҡ.

— Ҡалам!

— Сабыр ит, улым. Һиңә кимоно алырға кәрәк бит тәүҙә, — тине олатаһы теге кейемде ҡолаҡҡа ят сәйер исем менән атап.

Ай-вайына ҡарамай, шул мәлендә үк кимоно таптырҙы малай. Олатай кеше, быңдай ҙур теләкте күреп, ҡыуанып ҡуйҙы.

Таптылар үҙенә яраҡлы кейемде. Иртәгеһенә үк күнекмәгә ашыҡтырҙы Илһам. Ашҡынып залға инеп киткәйне, күп тә үтмәй, илап килеп сыҡты.

— Әй эттәгенәһе, тағы нимә булды? — Олатай ейәнен тымыҙа алмай өтәләнде.

— У-у... унда нык итеп ҡулыма, башыма һуҡтылар, түшемә төрт... төрттөләр, — Илһам һулҡылдапмы һулҡылданы.

Тағы уңмай ҡайттылар. Шулай ҙа малай уйынан дүнмәне. Ә олатай күндәм генә ейәнен сираттағы секцияға алып китте.

Баҡһаң, бассейнға килгәндәр икән. Балыҡтай йөҙгән-сумған малай-ҡыҙҙарға ҡыҙығып ҡарап торҙо Илһам. Улар кеүек булыу теләге тыуҙы.

Тик бына йөҙә генә белмәй шул ул. Бәлә юҡ, анау инструктор тигән ағай өйрәтә икән. Ниһайәт, эш бешә былай булғас!

Ләкин Илһам биш минуттан да, ярты сәғәттән дә, бер сәғәттән дә йөҙөргә өйрәнә алманы. Күрһәткәндәрен ҡабатлап, ҡулдары менән һыуҙы ишеп, аяҡтары менән йәнтәслим шапылдатыуҙары бушҡа булды. Киреһенсә, һыу ҡолаҡтанауына инеп сәсәтте, күҙҙәрен әсеттерҙе. Тәмһеҙ, һаҫыҡ нәмәкәйҙе хатта эсеп алырға ла тура килде.

Хәле бөтөп, баҫҡыстан бассейн ситенә күтәрелде ул. Олатаһы, аңлап:

— Ярай, ярай, Мәскәү ҙә бер көндә төҙөлмәгән, — тине.

Әммә Илһам күҙ йәштәренә төйөлөп:

— Булмайым мин йөҙөүсе! — тип ҡысҡырҙы.

— Атаҡ-атаҡ, үҙең спортсы булам тип тәкәтте ҡоротаһың даһа. Мин һине көсләп йөрөтәмдер шул. — Олатаһы үпкәләп ҡуйҙы.

— Барҙыр бит инде шунда берәй еңелерәк спорт. Эҙлә! Тап! — тип ҡарышты малай.

— Ярай, тырышырмын, — шулай тиергә генә ҡалды ҡарт кешегә.

Шәмбе етте. Иртән Илһамды олатаһының көр тауышы уятты:

— Тор, улым, мин һиңә шәп спорт төрө таптым. Аяғың да имгәнмәй, ҡулың да ауыртмаясаҡ, ҡолағыңа һыу ҙа инмәйәсәк. Әйҙә, тиҙерәк бул. — Был һүҙҙәргә ҡыҙыҡҡан малай йәһәт кенә кейенеп, арлы-бирле ҡапҡылап алды ла хыялына ҡаршы ашыҡты.

Ҡала буйлап тәүҙә — автобуста, аҙаҡ йәйәү барҙылар. Бер мәл ике ҡатлы бина алдында туҡтанылар. Олатаһы ҡәнәғәт йөҙ менән:

— Бына, улым, иң хәүефһеҙ спорт төрөнә ошонда өйрәтәләр инде, — тине.

«Ух! Туп менән уйнайҙармы икән бында, әллә сәкән һуғалармы? Бәлки, ҡылыс-маҙар менән алышалар ҙыр?» Илһам уйлап бөтөрмәне, ҡарашы ишек башындағы яҙыуға төштө. Ул ҡысҡырып ижекләп: «Шах-мат... шаш-ка клу-бы», — тип

уҡыны. Уҡыны ла ғәжәпләнеүҙән күҙҙәрен ҙур асып олатаһына төбәлде.

Олатаһы мут йылмайып, әйҙә, тигән кеүек ымланы ла эскә инеп тә китте. Илһамға башын эйеп, шым ғына уның артынан эйәрергә тура килде.

## ИХТЫЯР КӨСӨ

Кис етһә, Әминәнең өләсәһе ҡулына бәйләм ала. Оҫта шул уның ҡулдары: бәйләй, тегә, сигә... Эшләгән-яһаған әйберҙәре күҙҙең яуын алып ята.

Ҡыҙҙың да ҡул эшенә өйрәнгеһе килә. Өләсәһе янына ултырып, иғтибарлы күҙәтә. Бигерәк ҡулдарына күҙ эйәрмәй! Епте һәләк йәтеш кенә итеп эләктереп ала ла еңел генә биҙәк артынан биҙәк һала. Тиҙҙән яҫтыҡҡа тышлыҡ, ултырғысҡа япма, һауыт-һаба аҫтына ҡулайлама, иҙәнгә түшәк хасил да була.

Бер көн Әминә бәйләргә теләге барлығын белдерҙе. Өләсәһе ҡыуанып китте. Кемдең генә ейәнсәренә белгәнен өйрәтеп ҡалдырғыһы килмәһен?!

— Мә, энәләр, еп. Бына ҡара нисек бәйләмгә тотонорға икәнде, — тине ул.

Шунан оло кеше яйлап ҡына ҡыҙыҡайға энәгә күҙ йыйырға өйрәтә башланы. Ҡыйын булманы уныһы. Шулай ҙа өләсәһенең күҙҙәре тигеҙ генә, ә Әминәнеке йә иркенерәк, йә тығыҙыраҡ килеп сыҡты. Инде уң һәм һул күҙҙәргә күстеләр. Ҡатмарлы ғына икән! Бер юлды сыҡҡансы шыбыр тиргә батты ҡыҙ. Ҡулдары талды, бармаҡтары



ҡатты. Ә һул күҙҙе бөтөнләй салып ала алманы. Уң ҡулын эшләтһә, һулы тыңламай, һулын тура килтерһә — уңы сығынлай!

— Булмай, — тине ҡып-ҡыҙыл булған Әминә, — бәйләргә өйрәнә алмаҫмын ул.

— Нишләп булмаһын. Булыр. Түҙемлегең, сыҙамлығың ғына етһен. Бөтә ҡыҙҙар ҙа өйрәнә ҡул эшенә. Һин беренсе, һин һуңғыһы түгел.

Ләкин Әминәнең кәйефе төшкәйне инде. Ул бер ҡасан да өләсәһе кеүек етеҙ генә бәйләй алмаҫ, ахыры. Энә-ебен ташлап, тышҡа уҡ сығып китте. Күңелһеҙ генә баҡсалағы түтәлдәр янындағы эскәмйәгә барып ултырҙы.

Бер мәл шунда торған һыулы кәритәгә зырылдап ҙур ғына ҡара-ҡыҙғылт һары төҫтәге ҡуңыҙ килеп төштө. Белә Әминә был бөжәкте. Хатта шөрләй ҙә әле бер аҙ. Үҙе эре, мыйыҡтары антенна кеүек оҙон, үҙе көслө ҡурҡыныс тауыш сығара. Картуф баҡсаһына зыян килтерә ул. Тик колорадо ҡуңыҙы кеүек япрағын ашамай, сәскәһен юҡ итә был мәскәй.

Ҡуңыҙ һыуҙа батмай, тырышып-тырмашып йөҙә башланы. Алты аяғы менән дә йән-фарман ишә генә. Бер ҙә үлгеһе килмәй!

Әминә бөжәкте байтаҡ күҙәтеп ултырҙы. Әммә уны ҡотҡарырға ашыҡманы. Ашар ризыҡтарына зарар иткән нәмәкәйгә нишләп ярҙам ҡулы һуҙһын ул.

Иртән һуң ғына уянды ҡыҙ. Аш бүлмәһе яғынан тәмле еҫтәр килә. Тимәк, өләсәһе, ғәҙәттәгесә, тәмлекәстәр бешерә.

Йоҡонан торған ейәнсәрен күреп, өләсәй ҡыуанып китте:

— Вәт, ҡыҙым, иртәнгелеккә өлгөрҙөң. Әйҙә, ултыр, барыһынан да етеш. Көндәлек мәшәҡәттәрҙе теүәлләп алғас, тағы ла бәйләмгә тотонорбоҙ. Башлаған эште ташларға ярамай.

Әминә ауыҙын турһайтты. Йәне көйөп өләсәһенә ҡараны:

— Булмай минән. Килеп сыҡмай.

— И-и-и, бәләкәсемде. Улай тотҡан ерҙән һындырмай тор әле. Ййлап өйрәнерһең. Ниәт иткән — мораҙына еткән, — тине йылмайып унығы.

Ҡыҙыҡай шым ғына ултырып ҡапҡылап алды ла тышҡа йүнәлде. Баҡсаға инеп, түтәлдәрҙәге ҡый үләндәрен утарға тотондо.

Бер аҙҙан арыны. Ҡояш та аяуһыҙ ҡыҙҙыра. Бит-ҡулын сайып алырға тип һыулы кәритәгә эйелгәйне генә, унда кисәге ҡуңыҙҙы күреп аптырап ҡалды. Бына һиңә мә! Ун ике сәғәттән ашыу ваҡыт үткән, ә ул һаман да үлмәгәйне! Хәле бөткән, башы һыу аҫтына киткән, әммә һаман да яй ғына булһа ла аяҡтары менән ишеп маташа.

Әминәгә ҡыҙыҡ булып китте. Сүкәйеп ултырҙы ла күҙәтә башланы. Ҡапыл бөжәктең арҡаһында ҡоро бер ергә өйкөлөшкән алты-ете кескәй төймәсекте күреп ҡалды. Балалары бит! Үрмәксегә оҡшап, нескә генәләр.

Ул арала берәүһе һыуға ҡолап төштө. Инә ҡуңыҙ ишеүенән туҡтамай ғына артҡы аяғы менән тегене еңел генә ҡабат арҡаһына этеп мендерҙе.

«Бахырҡайҙар...» Әминә ҡуңыҙҙы ла, уның бәләкәстәрен дә йәлләне. Зыяндары тураһында ла онотто. Йүгереп йәһәт кенә утынлыҡҡа барып тапсыҡ алып килде лә, шуның менән теге ҡуңыҙ ғаиләһен эләктереп алды, кәритә эргәһендәге үләнгә һалды. Ҡуңыҙ тынып ҡалды. Мыйыҡтарын ғына арлы-бирле ҡыбырлатып ята бирҙе. Әллә үлде инде? Балалары әкрен генә уның баш яғына ыңғайланы. Бер мәл инәләренең муйын тирәһенә йыйылдылар. Әллә шунда көнгөрәнеке кеүек берәй муҡсаһы бармы икән? Ул осоп йөрөгәндә нисектер ныҡлы тотоноп ултырырға тейеш бит бәләкәстәре.

Әминә өйгә йүгерҙе. Ҡабаланып өләсәһенә күргәндәрен түкмәй-сәсмәй һөйләп бирҙе. Ейәнсәре һүҙҙән туҡтағас, өләсәй кеше хикмәтле генә итеп йылмайҙы ла:

— Бына күрҙеңме, бөжәктең бөжәге лә тырышып ята. Ишеүҙән туҡтаһа, харап булыр ине. Ә былай, берәй әмәле килеп сығыр әле тип, һуңғы сиккәсә тырмашҡан. Бәхетенә, һин килеп сыҡҡанһың, Хоҙайҙың рәхмәт төшкөрө. Шулай ихтыяр көсө күрһәтһәң, һин дә бәйләргә өйрәнерһең, иншалла, — тип ҡуйҙы.

Әминә өләсәһенең зирәклегенә шаҡ ҡатты. Кинәйәләп, тура ғына килтереп әйтеүе һуң! Инде лә ҡарышһа, оят булыр кеүек. Ни тип яуапларға ла белмәй, ҡыҙыҡай тышҡа йүнәлде.

Үҙе ҡотҡарған бөжәктәр яҙмышы һаман тынғы бирмәй ине уға. Баҡсаға инеп, ятҡан урындарына барып күҙ һалды. Бәй, ҡуңыҙ ҙа, балалары ла юҡ! Осоп киткәндәр! Теге тап ҡына ятып ҡалған.

Ҡыҙыҡайға еңел булып китте. Көйләй-көйләй ҡабаттан түтәл утарға кереште ул. Тиҙерәк эште бөтөрөргә кәрәк, унан өләсәһе янына инеп, бәйләмгә тотонаһы бар әле.

## БАҘАР ИҠТИСАДЫ

Фәнил бөгөн мәктәпкә матур ҡапта һағыҙ алып килде. Малайҙарҙың шунда уҡ күҙе ҡыҙҙы: «Миңә бир! Миңә бир!» Тәмле нәмә күп булмай тигәндәй, һағыҙ тиҙ арала таратылып бөтә яҙҙы. Һуңғы ҡалған берәүһенә Миләт менән Ғиззәт дәғүә итте. Фәнил кемгә бирергә лә белмәне. Шунда уның башына бер шәп уй килде: «Кем күберәк аҡса тәҡдим итә, шуға бирергә!»

— Аукцион!

Иптәштәре тәүҙә уның ни әйткәнен аңламаны ла. Ә тәфсирләп төшөндөрөп биргәс, аптырап ҡалдылар. Аҡсалары юҡлыҡтан түгел, ә быға са улай һатыулашҡандары булмағас. Фәнил алдына алғанды ҡуйманы. Бер бөртөк һағыҙҙы уртаға һалды ла килештереп сауҙаны башлап ебәрҙе. Һөҙөмтәлә, бар аҡсаһын сығарып һалып, Ғиззәт еңде.

Шул мәлдән алып Фәнилгә алыпһатарлыҡ ене ҡағылды. Өйҙән нимә генә килтермәне лә, нимәнән генә аҡса эшләмәне! Бер ҡап шоколадты ваҡ-ваҡ киҫәктәргә бүлһенме, магнитлы карточкаларҙы берәмләп осорһонмо, үҙе уйнап ялҡҡан фишкаларҙан ҡотолһонмо... Теләүселәр күбәйгәндә, хаҡты күтәреп, табышты ҡайырып

алды. Ризаһыҙлыҡ белдергәндәргә һуҡ бармағын күккә сөйөп: «Баҙар иҡтисады!» — тип кенә ебәрҙе.

Уҡыуға килгәндә инде, Фәнил шәптәрҙән түгел ине. Бигерәк тә урыҫ теленән алдыра алмай. Ярай әле, өйгә эште ваҡыт-ваҡыт ҡыҙҙарҙан күсерә һалып өлгөрә, ә контроль эштә парталашы Ғиззәт ярҙамлаша.

Шулай йөрөй торғас, тағы сирек аҙағы етте. Хәлдәре, ғәҙәттәгесә, әллә ни маҡтанырлыҡ түгел. Ялҡаулығын күреп, атаһы ҡаты киҫәтеп тә ҡуйҙы: «Ҡара уны, «өслө» сыға күрмәһен!»

Фәнил билдәләрҙе яҡшыртырға кәрәк икәнен аңланы. Мәктәпкә иртүк барҙы ла ҡыҙҙарға: «Ҡана, өйгә эште күсертегеҙ әле», — тине. Улары бер тауыштан: «Ә күпме түләйһең?» — тип яуапланы. Малай, аптырап, ни тиергә лә белмәй өнһөҙ ҡалды. Иптәштәренән яҡлау эҙләмәксе булғайны ла, Миләт һуҡ бармағын түбәгә төбәп һелкте: «Баҙар иҡтисады!» Ә Ғиззәт: «Онотма, иртәгә тағы контроль эш тә әле», — тип өҫтәне.

Баҙар иҡтисады ҡағиҙәләрен башҡаларҙың да шулай тиҙ үҙләштеререн Фәнил ниңәлер бөтөнләй уйламаған шул...

## КҮРӘҘӘСЕ

Оҙон тәнәфестә синыф бүлмәһендә бәхәс ҡупты. Күрәҙәселәр тураһында. Әлеге лә баяғы Ғайса башланы:

— Кисә кис тапшырыу ҡаранығыҙмы? Вәт, исмаһам, сиған Марина киләсәкте оҫта юрай! Моғайын, ул еңеүсе булыр.

— Булмай торһон әле! Теге шаманға етеүсе юҡ. — Мисхәт ҡаршы сыҡты.

Зәлифә түҙмәне, сәрелдәп ебәрҙе:

— Әстәғәфирулла, үҙебеҙҙең мосолман Зарифа өсөн көйәйек! Ул бик көслө. Доғаһы ярҙам итәлер әле.

Дәфтәр тикшереп ултырған уҡытыусылары Әлфиә апайҙары башын күтәреп бөтәһен дә күҙ уңынан үткәрҙе:

— Күрәҙәсегә барма — башыңа бәлә алма, ти халыҡ.

Уҡытыусының тыныс ҡына әйтелгән был һүҙҙәре утҡа кәрәсин һипкәндәй булды. Бүлмә умарта күселәй гөжләй башланы. Тағы Ғайсаның тауышы яңғыраны:

— Улар күптәргә ярҙам итә бит. Юғалған әйберҙе табышалар, сирҙәреңде билдәләйҙәр, киләсәгеңде әйтәләр.

Әлфиә апай дәфтәрен ситкә ҡуйҙы:

— Бөтәһен дә дөрөҫ күҙаллау мөмкин түгел. Ә хаталанып, кемгәлер зыян да килтереүең бар. Әйберҙе эҙләү — полиция, сирҙәрҙе дауалау — табиптар эше. Ә киләсәгеңде белеү кәрәкме икән һуң? Яҙмышыңа ни яҙылған, шуны күрәһең инде ул.

— Эй-й, барыбер ҡыҙыҡ та инде. Бына һеҙ үҙегеҙ һуң уларҙың ярҙамынан баш тартыр инегеҙме? — Ғайса һүҙен биргеһе килмәне.

— Сараһыҙҙан, бәлки, барыр ҙа инем. Ә былай ваҡ-төйәк өсөн түгел инде. Ундай хәлдәрҙән сығыр өсөн үҙеңә оҫта психолог булыу ҙа етә.

Ҡыҙҙар, малайҙар дәррәү генә көлөп ебәрҙе. Унда-бында: «Әлфиә апай ҙа күрәҙәселәр менән ярыша ала», — тигән тауыштар ишетелде. Тик шул урында дәрескә ҡыңғырау яңғыраны. Барыһы ла һөйләшеү бүленгәнгә ҡәнәғәтһеҙлек күрһәтеп, урындарына таралышты.

Шуның менән күрәҙәселәр тураһында онотҡан да булырҙар ине. Әгәр дәрестәр бөтөүгә Әлфиә апайҙың аҡсаһы юғалмаһа. Сумкаһынан ҡасан, кем алғандыр, берәү ҙә күрмәй ҡалған. Уҡытыусының ҡат-ҡат һорашыуы һөҙөмтә бирмәне. Аҡса ла, ғәйепле лә табылманы.

Уҡыусылар, аптырап, өнһөҙ генә бер-береһенә ҡараштылар. Шунда Ғайса телгә килде.

— Әлфиә апай, бына күрәҙәсе, исмаһам, аҡсағыҙҙы ла, бурҙы ла табыр ине. Бушҡа һеҙ уларға ышанмайһығыҙ, — тине.

Уҡытыусы, асыуланып,ниҙер әйтергә булды ла тыйылды. Шунан ҡапыл йөҙө үҙгәреп китте лә, йылмайып:

— Эйе шул. Берәй күрәҙәсегә барайым әле, тотторһон уғрыны. Иртәгә әйтермен нимә килеп сыҡҡанын. Бәлки, шуға тиклем аҡсаны кире ҡайтарырҙар.

Иртәгеһенә синыф уҡытыусы ни әйтер тип көттө. Әммә ул бер ни булмағандай дәрестәр үткәреүен дауам итте. Шул арала шым ғына синыфты күҙҙән үткәреп, оҙаҡ ҡына уйланып та торҙо. Мәктәптән ҡайтыр ваҡыт еткәс, көтөп

тороуҙарын үтендe. Ҡарашы менән бүлмәне байҡап алғас, тамағын ҡырҙы:

— Мин аҡсаның кемдә икәнен белдем. Иртәгегә тиклем көтәм дә ҡайтарып биреүен, шунан исемен әйтермен. Әлегә ул насар эш башҡарғанын аңлап, хатаһын төҙәтер, тип ышанам.

Бүлмә геү итеп ҡалды. Бөтәһе лә ах та ух килеп тел шартлатты. Тағы ла күрәҙәселәр тураһында бәхәс китте. Һәр кем үҙ фекерен әйтеп ҡалырға тырышты. Иң артҡы парта артында ултырған Фәриә генә берәүгә лә күтәрелеп ҡарамай ҡып-ҡыҙыл булып башын түбән эйгәйне.

Иң ҡыҙығы шул: иртәгеһенә юғалған аҡса уҡытыусы өҫтәлендә ята ине. Ҡасан кем килтереп һалғанын берәү ҙә күрмәй-белмәй ҡалды. Әлфиә апай-«күрәҙәсе»нән башҡаһы.

## ХЫЯЛ ИТ

Балалар тауышынан гөрләп торған яҡындағы мәктәпкә күптән барып уҡығыһы килә ине Сабирҙың. Йәше лә еткән, бишенсене тамамлай инде, ара ла яҡын. Тик хикмәт унда түгел. Сәбәбе малайҙың инвалид булып, махсус арбала ғына йөрөй алыуында. Шуға күрә өйҙә генә ултырып, уҡытыусылар килеп кенә белем бирә уға.

Һәйбәт өлгәшә лә бит, физик мөмкинлектәре самалы шул. Билдәле, иптәштәре лә юҡ тиерлек. Моңаймаһын тип, ата-әсәһе үҙенә айырым телевизорын да, «дивиди»һын да, уйынфәсмәтәндәрен дә алып биргән. Кара, әйҙә, уйна. Әммә Сабирҙың күңеле, ситлектәге ҡоштоҡо



һымаҡ, тышҡа, иреккә ынтыла. Бала ғына бит әле ул. Һикергеһе, йүгергеһе килә. Ҡасан, нилектән быңдай сиргә дусар ителгәндер, иҫләмәй. Бәләкәй булғандыр, күрәһең.

Үҙ аяҡтарында бер нисә аҙым булһа ла атларға зарығып ултырғанында ул телевизорҙан хәрәкәтле уйындар ҡарарға әүәҫ. Бигерәк тә хоккей оҡшай уға. Ярай әле, яратҡан командаһының уйындарын йыш күрһәтәләр. Боҙ өҫтөндә ҡоштай осҡан хоккейсыларға ҡарап, һоҡлана ла, көнләшә лә ул. Был ваҡытта уның эсендә ниндәй хис-тойғолар ҡайнағанын аңлаһа, малай кеүек аяҡтан яҙып ултырған сирле генә аңлар, моғайын. Ауырыу хәлен һау белмәй, ти бит өләсәһе.

Ә Сабирҙың иң яратҡан уйынсыһы — Александр Дулов. Уның кеүек оҫта илдә генә түгел, бөтә Ер шарында юҡтыр ул! Аяҡтары конькиҙа ныҡлы баҫып тора, ҡулдары тилбер. Сәкәне менән шайбаны этә-этә ҡаршыһына килгән хоккейсыларҙы кәйелеп үтеп алға елә лә йә матур ғына итеп берәйһенә пас бирә, йә үҙе һөжүмгә нөктә ҡуя. Гол индергәс, ҡыуаныуҙары һуң! Йә, күрҙегеҙме, тигәндәй, майҙансыҡты уратып алған кәртәнең быялаһына барып бәрелһенме, йә сәкәнен мылтыҡ итеп, һунарсы булып ҡыланһынмы, йә ишкәк итеп, кәмәлә йөҙөп барыуын һүрәтләһенме. Ундағы көс, ундағы дәрт ун кешегә етерлек! Иптәштәренә кәңәш биреп тә, кемеһендер тәнҡитләп тә, ҡаршы команда уйынсыһына уның менән килешмәүен әйтеп тә, судьяға дәғүәһен белдереп тә өлгөрә. Ҡыҫҡаһы, был хоккейсы үҙе ярты командаға торошло. Ул булмаһа, тоҙһоҙ аш шикелле, уйын төҫһөҙ.

Шулай үҙ донъяһына бикләнеп йәшәгән малай өсөн быйыл күк ҡабағы асылды бит. Олпат ағай-апайҙар мәктәптә һау балалар менән сәләмәтлектәре ҡаҡшағандары ла бергә уҡыһын тигән ҡарар сығарған. Йәнәһе, кеше араһында йәшәргә, тормошҡа яраҡлашырға өйрәнһендәр, бүтәндәр ҙә уларға ҡарата миһырбанлыҡҡа ынтылһын.

«Ҡайһылай ҙа шәп уйлап тапҡандар!» — һаулыҡҡа туя алмаһа ла, малайҙар һәм ҡыҙҙар менән аралашыуға һыуһаған Сабир шулай уйланы. Сентябрҙе түҙемһеҙләнеп көттө. Ошо хаҡта өйҙәгеләрҙең дә ҡолаҡ итен ашап бөтөрҙө. Тик атаһы менән әсәһе генә борсолдо. «Иптәштәре йәберләмәҫме, үҙен ала ҡарға итеп тоймаҫмы?» — тип хафаландылар. Ахыры, көндәләр шикелле. Райондан түрәләр ҙә ҡат-ҡат күренеп китте. Махсус парта алғандарын, мәктәпкә ингән ерҙә махсус баҫҡыс — пандус эшләткәндәрен әйттеләр. Хатта бер көн буласаҡ синыф етәксеһе бер төркөм иптәштәрен таныштырырға алып килде.

Ниһайәт, көткән көн етте. Сабирҙы матур итеп кейендереп, инвалид арбаһына ултыртып, этеп алып киттеләр. Атаһы, әсәһе, өләсәһе лә барҙы. Малай Белем көнөндәге тантанала тәүгә генә булмаһа ла, унан һуң башҡалар менән бергә мәктәпкә инәсәген, дәрестәргә ҡаласағын күҙ алдына килтереп, йылмайып ултырҙы.

Ә иртәгеһен бөтә ҡыуаныстары һәм ҡыйынлыҡтары менән уҡыу йылы башланды. Сабирҙы иртән әсәһе йә атаһы оҙатып ҡуя, төш килеп ала.

Тәнәфес вағыттарында өләсәһе ингеләп ҡарап сыға. Былай ул арбаһын үҙе лә оҫта ғына йөрөтә.

Уҡыуы ауыр түгел. Өйҙә генә ултырғас, йышыраҡ китап тотоп үткәрҙе бит ваҡытын. Күпте белә ул. Ә бына тәнәфес башланыуын белдереп ҡыңғырау шылтыранымы, уның өсөн мәхшәр ҡуба. Бөтәһе лә шаулаша, парталар араһы йә коридор буйлап саба, бер-береһен баҫтырыша башлай. Сабир башын уңлы-һуллы борғолап, аптырап күҙәтеп тик ултыра. Малайҙар бүлмәнән сығып һыҙһа, арбаһының тәгәрмәсен ҡулдары менән әйләлтеп арттарынан ашығa ла, ашыҡ-бошоҡ ҡыланып, парта осона йә ишек яңағына төкөлә, ә коридорҙа инде шаян бала-саға үҙе уның өҫтөнә килеп менә. Шулай ауыртынып, күҙе-башы күгәреп тә бөттө.

Әммә былар иптәштәре янында булыу шатлығы эргәһендә сүп кенә ине. Өҫтәүенә, уға ярҙамға килергә ашығып тороусылар ҙа табылды. Ихлас, эскерһеҙ синыфташтары зәғиф малайҙы ҡурсалап ҡына йөрөттө. Ҡулындағы ҡәләме, дәфтәре иҙәнгә төшһә лә, кем уҙарҙан алып бирергә ташландылар. Донъяны гәзит-журнал, китаптарҙан уҡып, телевизорҙан ҡарап булһа ла танып белеүе ярҙам итте уға. Йәйләп күпте белгән зирәк малай бөтөн иптәштәрен үҙенә ҡаратты. Мораттан башҡаларын.

Шул Моратҡа ғына юлын таба, асҡыс ярата алманы. Уныһы үҙе быны теләмәне шикелле. Гел киреһен һөйләне, ҡаршы сыҡты. Ә бит уның менән бигерәк тә дуҫлашҡыһы килгәйне Сабирҙың. Сөнки Морат — шәп спортсы. Ярыштарҙа гел алдынғы. Спорт төрҙәре, уйындар

һәм билдәле спортсылар тураһында ла күпте белә. Шуға ваҡыт-ваҡыт маһайыбыраҡ та китә. Һуҡырҙың теләгәне — ике күҙ тигәндәй, зәғиф малай шул йүгерек, сос, етеҙ синыфташына тартылды ла уның менән дуҫлаша алмағанына бик ҡайғырҙы.

Ә бер көн, үтә аяуһыҙ ҡыланып, үҙенең кәмселегенә төрттөргәс, Сабирға уғата ҡыйын булды. Уҡытыусы өйҙә «Минең хыялым» тигән темаға инша яҙып килергә ҡушты. Икенсе көндө дәрестә ҡайһы берәүҙәрҙең ижади эшен ҡысҡырып уҡыуын үтенде. О, ул хыялдарҙың төрлөлөгө һәм байлығы! Кемдер актриса һөнәренә уҡып, Голливудта киноға төшәсәк, кемдер үҙен донъяға шәп белгес итеп танытасаҡ, кемдер ҡалын кеҫәле түрә булып китәсәк, йәнәһе. Ҡыҫҡаһы, бөтәһе лә дан ҡаҙанып, бай йәшәйәсәк.

Сират Сабирға еткәс, бүлмә шымып ҡалды. Беләләр, ул быларҙың береһе хаҡында ла хыялланмай. Сөнки ошо инвалид арбаһынан ары китә алмаясаҡ. Берәүҙәр йәлләп, икенселәр ҡыҙыҡһынып, уның алдында ятҡан йәшел тышлы дәфтәргә текәлде.

Сабир уны ашыҡмай ғына ҡулына алды ла уҡый башланы: «Мин хоккей уйынын яратам. Телевизорҙан бер матчты ла ҡалдырмай ҡарап барам. Айырыуса беҙҙең Өфө командаһының уйындарын. Ә яратҡан хоккейсым — Александр Дулов. Уға еткән спортсы юҡтыр! Ул шундай оҫта! Боҙ өҫтөнән елдәй елә, ҡоштай оса. Минең хыялым — ҡасандыр уның менән осрашып, автограф алыу...» Шым ғына ултырған бүлмә геүләп ҡуйҙы. Сөнки Александр Дуловҡа берәү ҙә бита-

раф түгел. Исеме телгә алыныу менән, уға һоҡланыуҙар яуа, бәхәстәр тыуа.

Уҡытыусы Сабирҙы маҡтап та өлгөрмәне, уңайһыҙ хәл тыуҙы. Күрәһең, был инша Мораттың сәменә тейҙе. Әйтерһең, спорт темаһында беренселекте бирмәгән малайҙың икмәген тартып алдылар! Уның тауышы уҫал яңғыраны:

— Һы, әллә Дулов һинең менән һөйләште лә ҡуйҙы, тиһеңме? Әйләнеп ҡараны, ти, ул һәр артынан эйәргән кешегә. Ул бит «йондоҙ»! Үҙен барыһынан да өҫтөн тота, бик һауалы ла тиҙәр уның хаҡында. Осрашырға, автограф алырға, имеш...

Сабирҙың йөҙө ҡып-ҡыҙыл булды. Ҡулынан дәфтәре төшөп китте. Ғәрлегенән партаға ҡапланып, күҙҙәрен йәшерҙе. Кемдеңдер дәфтәрен эйелеп алып алдына һалғанын, уҡытыусының ҡыҙып-ҡыҙып Моратты әрләгәнен яҙа-йоҙа ғына иҫләй ул. Шул көндән алып мәктәпкә барманы. Ҡара көҙ үтеп, саҡ ҡар яҫҡайны әле.

Бик ауыр кисерҙе был мыҫҡыллауҙы Сабир. Шул яҡты хыялы менән йәшәй ине, унан әсе көлдөләр. Өмөтөн селпәрәмә килтереп, ергә һалып тапанылар бит.

Хәлен белергә тип, синыфташтары, уҡытыусылары өйөнә килде. Морат ҡына күренмәне. Күренмәүе хәйерле, Сабир быны күтәрә алмаҫ ине, моғайын. Әле лә берәүҙе лә күргеһе килмәй, сәғәттәр буйы үҙ бүлмәһендә бикләнеп ултырыуҙы хуп күрә. Бары тик өләсәһе генә көнөҙөнө эргәһендә уралған була. Күңелен күрәм, тиҙер инде. Бына тағы янына килеп, төшөрөп бөтөп кенә торған һүрәтенә текләп ҡарап торҙо:

— Ҡайһылай матур килеп сыҡҡан! Кем ул?

Сабир, ниһайәт, йылмайҙы:

— Александр Дулов, өләсәй. Хоккейсы.

Ейәненең күңеле ирегәнен тойоп, өләсәһе эләктерә һалып алды:

— Әйҙә, һүрәтеңде «Минең хоккей командам» тигән конкурсҡа ебәрәйек. Кисәге гәзиттәрҙә шул турала хәбәр бар ине бит.

— Ысынмы? Барырлыҡмы эшем? — Ҡыҙыҡһыныуы малайҙың йөҙөнә сыҡты.

— Бармай әллә! Бына тигән! Хәҙер адрес-фәләнен ҡарайым да...

Өләсәһе Сабир тураһында хат та яҙып, һүрәт менән бергә ҙур конвертҡа тыҡты. Почта бикләнмәҫ борон тип, йүгереп барып ҡалдырып та килде.

Ике ай үтеп, көтә-көтә көтөк булғас, бер көн Өфөнән шылтыратып, Сабирҙы һүрәттәр конкурсында дәртләндереү бүләгенә лайыҡ булыуы менән ҡотланылар. Тәбрикләү тантанаһына — яратҡан командаһының сираттағы матчына саҡырҙылар. Бүләккә нимә теләгәнен һоранылар. Малай теле көрмәлә-көрмәлә саҡ-ҡа: «Дуловтың автографын», — тип әйтә алды. Телефон бәйләнешенең теге осондағы апай көлөп ҡуйҙы: «Киммәтле призды көҙ уңында тотам, туғаным. Ярай улайһа, беҙҙең ҡарамаҡҡа булыр». Шунан көнөн, сәғәтен билдәләп, һуңламай килеп етергә ҡушты ла йылы ғына хушлашып трубканы һалып ҡуйҙы.

Сабирҙарҙың өйөнә байрам кәйефе инде. Дәррәү генә юлға әҙерләнә башланылар. Атаһы ҙур, иркен машина һөйләшеп ҡайтты. Әсәһе

бешеренеп-төшөрөндө. Өләсәһе кейем-һалымын рәтләне.

Сак көтөп алдылар тәғәйен көндө. Иртән юлға сығып, төштән һуң Боҙ һарайына барып еттеләр. Ашап алдылар, арена буйлап экскурсияла йөрөнөләр. Тик бына хоккейсылар менән генә осрашырға насип булманы. Уйын көндө улар сәғәт бишкә килә лә күнекмәгә инеп тә китәләр икән. Матч алдынан егерме минут боҙҙа оҫталыҡтарын һынайҙар ҙа, тағы егерме минут ял иткәс, уйын да башлана.

Бүләкләнеүселәр күп кенә. Өс йәш төркөмөндә призлы урын алған малайҙар һәм ҡыҙҙар, уның кеүек дәртләндереү бүләгенә лайыҡ булыусылар ҙа бар. Бергә ултырып хоккей ҡаранылар ҙа, уйын аҙағынараҡ боҙ майҙансығы янына барып, теҙелешеп баҫтылар.

Сабир артҡараҡ ҡалды. Сөнки тәүҙә беренсе-өсөнсө урынды алғандар сыға икән. Сираттың ҡойроғонда килеш муйынын һуҙып уйынсылар араһынан Дуловты эҙләне. Әһә, бүләкләүселәр рәтендә ул да бар. Ана, иң тәүге булып баҫып тора! Шулай булмай, ул бит иң сағыу «йондоҙ»!

«Туҡта! Беренсе торғас, анау иң алдағы бәләкәс ҡыҙға тапшырасаҡ бит бүләкте. Мин боҙға сыҡҡансы китеп тә барыр инде. Их, нимә эшләргә?» Шулай уйлап, хафаланып торған Сабир, боҙға кеңәм йәйгәндәренсә, арбаһын теге ҡыҙҙы етәкләп торған апай янына йүнәлтте.

— Апай, — тине ул тыны ҡыҫылып, — мөмкинме боҙға мин беренсе сығам?

Боҙ һарайы хеҙмәткәре аптырап китте, ни тиергә лә белмәне. Кемдең сираты ҡасан икәнен

бая әйтте лә һуң! Тик инвалид арбаһындағы малайҙың үтенесен нисек кире ҡағырға?

Матурлап, ипләп кенә аңлатырға ваҡыт тығыҙлыҡтанмы, ялбарып үҙенә баҡҡан ҡараште күтәрә алмаймы, апай ҡағиҙәне боҙҙо:

— Әйҙә!

Ҡыҙыҡ, сираттағыларҙың береһе лә ризаһыҙлыҡ белдермәне. Әллә Сабирҙы йәлләнеләр, әллә унын хәйләһен аңғармай ҡалдылар.

Һүҙҙе диктор алды. Ул микрофонға һөйләне, арена алҡышлап ҡул сапты. Сабирҙы арбаһынын менән күтәреп боҙ өҫтөнә йәйелгән келәмгә сығарып ултырттылар. Александр Дуловтың ҙур сағыу пакет тоттороп, ҡулын ҡыҫыуы ла, һуҙған ҡағыҙына автографын ҡуйып, бергәләп фотоға төшөүҙәре лә хәтерендә матур бер төш кеүек булып ҡалды. Сөнки, ысынлап та, оҙаҡлап туҡталып торманы данлыҡлы хоккейсы, трибуна аҫтына инеп юғалды. Унын ҡарауы, автографы ҡалды. Күпме хыялланған ҡултамғаһы!

Сабирҙарҙың Өфөгә барып ҡайтыуы төпкөл ауылда оло бер ваҡиға булды. Хәбәр дүрт аяҡлы бит, шунда уҡ өйҙәренә туған-тыумаса, күршекүлән, синыфташтары килеп тулды. Ах та ух итеп, һәр береһе бүләктәрен, бигерәк тә Дуловтың автографлы ҡағыҙын тотоп ҡараны. Араларында Морат ҡына күренмәне. Килһә лә, Сабир тамсы ла асыуланмаҫ ине, моғайын.

Әммә хәл-ваҡиға бының менән генә бөтмәне. Ике аҙнанан тағы ла Өфөнән шылтыраттылар. Боҙ һарайынан кемдер Александр Дулов исеменән Сабирға ниндәй табип ярҙамы кәрәклеген, донъяның иң яҡшы клиникаларында

тикшеренеү үтеп, дауаланырға мөмкинселек барлығын белдерҙе. Бөтә сығымдарҙы хоккейсы тулыһынса үҙ өҫтөнә аласаҡ, тип тә өҫтәне. Һөйләшеү-кәңәшләшеү өсөн уларҙы Өфөгә саҡырҙылар.

Яңылыҡ малайҙы ла, ата-әсәһен дә шаңҡытты. Ышанырға ла, ышанмаҫҡа ла белмәнеләр. Күпте күргән өләсәһе генә: «Собханалла! Хоҙай, сәбәп итһәң, бирермен, тигән бит. Хыялыңа ынтылыуҙан төңөлөргә ярамай, хыял ит, улым», — тип йомғаҡлап ҡуйҙы.

Был юлы Сабирҙарҙы оҙатырға бөтә ауыл сыҡты. Һәр кем йылмая, изге теләктәрен еткерә, хәйерле юл теләй. Сабирҙың да күңеле йырлай, йөрәгенә шатлыҡ ҡына тулған. Шуны барыһына ла тигеҙ итеп өләшкеһе килә. Хатта анауында иптәштәре арҡаһына йәшеренеп кенә ҡарап торған Моратҡа ла.



# ЙӨКМӘТКЕҺЕ

## Шиғырҙар

Бәшмәктә . . . . . . . . . . . 6
Дегәнәк . . . . . . . . . . . . . 7
Юл япрағы . . . . . . . . . . 7
Бәпембә . . . . . . . . . . . . 8
Миндек . . . . . . . . . . . . . 9
Һандуғас . . . . . . . . . . . 10
Ҡарғалар . . . . . . . . . . . 10
Бесәнгә! . . . . . . . . . . . . 11
Егет . . . . . . . . . . . . . . . 12
Ҡырмыҫҡа менән
һөйләшеү . . . . . . . . 12
Серәкәй . . . . . . . . . . . . 13
Машина алғас . . . . . . 13
Телевизор . . . . . . . . . 13
Бәпәй . . . . . . . . . . . . . . 14
Атай ҡосағында . . . . 15
Йәшәйек татыу . . . . . 15
Шар . . . . . . . . . . . . . . . 16
Ҡорама юрған . . . . . . 16
Ярҙамсы . . . . . . . . . . . 17
Өләсәйгә — ҡунаҡҡа 17
Һөт ятраҡас . . . . . . . . 18
Икмәк булһын . . . . . 18
Аҡ быйма . . . . . . . . . . 19
Трактор . . . . . . . . . . . . 20
Ҡолон . . . . . . . . . . . . . 20
Ата ҡаҙға . . . . . . . . . . 22
Маҡтансыҡ әтәс . . . . 22
Һыйыр һауғанда . . . . 24
Тағараҡ . . . . . . . . . . . . 24
Беҙҙең мәсет . . . . . . . 25

## Хикәйәләр


Туп . . . . . . . . . . . . . . . . 28
Ҡушамат . . . . . . . . . . . 34
Тишек күлдәк . . . . . . 38
Һемәйеү . . . . . . . . . . . 43
Ныҡыш ҡыҙ . . . . . . . . 47
Ҡырағай бесәй балалары . . . . . . . . 51
Әфлисун тәме . . . . . . 59
Запас тәгәрмәс . . . . . 64
Иң еңел спорт . . . . . . 69
Ихтыяр көсө . . . . . . . 73
Баҙар иҡтисады . . . . 78
Күрәҙәсе . . . . . . . . . . . 79
Хыял ит . . . . . . . . . . . . 82

Литературно-художественное издание

Для детей младшего и среднего школьного возраста

**Булякбаева-Бирганова Гульдар Мухаррамовна**

**ВКУС АПЕЛЬСИНА**

Стихи, рассказы

*(на башкирском языке)*

Мөхәррире *Р. М. Зәйтүнова*
Биҙәлеш мөхәррире *А. Р. Мөхтәруллин*
Техник мөхәррире *Г. Р. Исхакова*
Корректорҙары *Г. Р. Попова, З. М. Камалова*

Баҫырға ҡул ҡуйылды 11.05.12. Форматы 60x90$^1/_{16}$. Офсет ҡағыҙы. Балтика гарнитураһы. Шартлы баҫма таб. 6,0. Шартлы буяу отт. 24,5. Иҫәп-нәшер таб. 3,5. Тиражы 2000 дана. Заказ 120529.

Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.

Әҙер файлдарҙан баҫылды.

Башҡортостан Республикаһының «Белая река» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450078, Өфө, Салауат Юлаев проспекты, 55.